әкиәттәрҙә әҙәп куркәмлеге

Энгин Нигар

әкиәттәрҙә әҙәп

КҮРКӘМЛЕГЕ

Энгин Нигар

УДК 28-1
ББК 86.38-124.7
Т14

Баһалаусылар:
А.З. Салеев
Р.Р. Фасхудинов
К.Л. Жагипаров
Р.Ш. Мамедов

Рус теленән тәржемәсе:
Мөслимә Аскарова

Редактор:
Айҙар Хәбибуллин

ВСЕ ПРАВА ЗАЩИЩЕНЫ
ISBN: */*****
ИЗДАТЕЛЬСТВО ООО “МИР ЗНАНИЙ” 2023

Книги можно заказать:
Тел. 8(968)7693443
Веб-сайт: www.islamicbook.ru
mirznaniy571@mail.ru

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

ҠЫЙЫУ ҺӘМ БАТЫР ҠУЯН 4
АҠЫЛЛЫ ДИҢГЕҢ ҠЫҘАЛАҺЫ ҺӘМ МӘКЕРЛЕ ҺИГЕҘАЯҠ (ОСЬМИНОГ) 11
ХЫЯЛЫЙ БЕСӘЙ 17
КОРОЛЕК ИСЕМЛЕ БӘЛӘКӘЙ ТУРҒАЙ СӘЙӘХӘТЕ 22
ЯҢҒЫҘ ҠОРАЛАЙ 27
МӘРХӘМӘТЛЕ ҠУЯН 31
ТЫҢЛАУҺЫҘ ӨЙРӘК БӘПКӘҺЕ 38
ҠАМҠА (БОЖЬЯ КОРОВКА) 44
ФИЛ ҺӘМ ЖИРАФ 49
СОЛТАН ХӘЙЛӘҺЕ 54
БҮРЕ ҺӘМ ӘРӘМТАМАҠ ТӨЛКӨ 60
ТӘРТИПҺЕҘ ҠАПЛАН (ЛЕОПАРД) 66
ШАЯРЫУ 71
АХМАҠ ТАУЫҠ 76
ЕРӘН МУТБИКӘ 82
ИҢ МӨҺИМЕ – САБЫРЛЫҠ! 88

ҡыйыу һәм батыр ҡуян

Бик күп тауҙар артылып, үҙән – туғайҙар үтеп бер аҙ барғас, йәп-йәшел бер урманға барып инәһең. Был урманда бейек һәм һомғол ағастар, ҡуйы һәм һутлы үләндәр, күҙҙең яуын алырҙай сағыу сәскәләр, түшәлеп яткан ҡайын еләгенә бай аҡландар – барыһы ла бар икән.

Тик урманда ҡанһыҙ, үҙ-үҙенән бик ҡәнәғәт, йәлләү хисенең нимә икәнен дә белмәгән ҡупырыш Арыҫлан батшалыҡ иткән.

Уның холҡо бик насар булған. Нимә теләгән, шуны ҡылған, ә башҡа йәнлектәргә бер ни ҙә рөхсәт итмәгән. Арыҫлан батша саф һауала йөрөргә сыҡһа, урмандағы булған бар йыртҡыс – йәнлектәр ҡоттары осоп, йән-яҡҡа ҡасып йәшенеп ҡалырға ашығалар икән. Уның әшәке холҡон барыһы ла белеп бөткәнлектән, бер кем дә уның юлында осорарға теләмәгән.

Бер ваҡыт арыҫлан, ғәҙәттәгесә, урман буйлап йөрөргә сыға. Уны күреү менән, барыһы ла, төрлө яҡҡа сәселеп ҡасыу сараһын күрә. Батша был хәлде күреп, үҙенән ҡурҡҡандарына шул хәтлем ҡәнәғәт ҡала.

“Мин ниндәй көслө! Бер күҙ ҡарашымдан ғына ла дер ҡалтырап төшәләр! Ҡурҡыштарынан йәһәт кенә ҡасып, тиҙерәк йәшенеү юлын эҙләйҙәр!” - тип уйлай – уйлай, ғорур ҡиәфәттә үҙ юлын дауам итә.

Арыҫлан батша, ҡараңғы төн еткәнсе, урманды арҡырыһынан буйына тиклем гиҙеп сыға. Юлында тап булған һәр береһенә үҙенең ҡәнәғәтһеҙлеген күрһәтә. Мыҫкыллы һүҙҙәр әйтеп рәнйетә, шелтәләп күңелдәрен ҡыра, асыуынан сыҙамай ярһып ырылдай.

Шулай итеп, китеп барғанында, юлына ҡапыл аңғармаҫтан төлкө килеп сыға.

- Һин нисек минең алдымдан йүгереп үтергә баҙнат иттең?! - тип, Арыҫлан үткер аҙау тештәрен ыржайтып үкереп ебәрә.

Урманда ял итеп йөрөгән Арыҫланды һуң ғына күреп ҡалған төлкө, дер ҡалтырап артҡа сигенә:

- Зззинһар ғәфү итегеҙ мине, һеҙҙең ғали йәнәптәре! Мин балаларым эргәһенә ашыға инем. Улар өйҙә үҙҙәре генә ҡалды, мине көтәләр! Бик тә ашыға инем бәләкәстәремә, шуға һеҙҙе күрмәйерәк ҡалдым шул!

- Нимә мығырлайһың унда? Кит юлымдан йәһәтерәк!!!

Ҡурҡышынан һәм рәнйетелеүҙән төлкөнөң күҙҙәренән йәштәр тәгәрәй. Шулай ҙа, был урындан тиҙерәк тайыу яғын ҡарай.

Урманда йәшәү көндән-көн күңелһеҙ, ҡайғылы һәм ҡурҡыныс була

башлай. Әммә, үкенескә ҡаршы, бер кем дә ҡыйыулығын йыйып, Арыҫланға йәмһеҙ ҡыланыуын әйтергә батырсылығы етмәй.

Урмандағы йәнлектәр араһында бер бәләкәй генә ҡуян балаһы була. Ул барыһына ла бергә йыйылырға ла, батшаның ҡыланыштары менән риза түгеллектәрен үҙенә әйтергә өндәй. Әммә урманда көн итеүселәр был тәҡдимде кире ҡағалар, сөнки уҫал һәм ҡурҡыныс батшанан ҡурҡалар ине. Әммә бер көн бәләкәй генә ҡуян балаһы, бер үҙе сыға ла Арыҫланға был хаҡта әйтә.

Ғәҙәттәгесә, батша ул көндө урман буйлап ашыҡмай ғына үҙенең биләмәләрен ҡыҙыра ине. Һәр ваҡыттағыса, бар йәнлектәр ҡурҡыштарынан йән – яҡҡа һирпелеп ҡасалар. Тик бәләкәй ҡуян балаһы ғына, арыҫланға иғтибар ҙа итмәй, аҡландағы йәшел һутлы үләнде йолҡоп ашуын дауам итә. Уға бигерәк тә хуш еҫле, һутлы клевер сәскәләре оҡшай, һабаҡтарынан уларҙы өҙөп алып, ләззәтләнеп көйшәй.

Был күренешкә арыҫлан хайран ҡала, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай. Ишетелмәҫлек хәл бит!!! Асыуынан тыны бөтөп саҡ тонсоҡмай:

- Эй, ҡуян! Кил әле бында!- тип ырылдай.

Ҡуян балаһы ныҡ ҡурҡҡанын белдермәҫкә тырышып, яй ғына арыҫланға яҡынлаша:

- Тыңлайым, батшам. Мине саҡырҙығыҙмы?

- Әйт әле! Нигә мине күреү менән ҡурҡып ҡасманың? Һин нимә? Ҡурҡмайһыңмы?

- Нимәнән миңә ҡурҡырға? Үлән ашап йөрөп, һеҙҙе күрмәнем дә хатта. Һеҙҙән ҡурҡҡандай насар эш эшләнемме әллә? Ғәйеплеләр генә ҡурҡа бит, - тип яуаплай ҡуян балаһы.

Бәләкәй генә ҡуян балаһының ҡыйыу яуабын ишеткән Арыҫлан тағы ла нығыраҡ нәфрәтләнә. Шулай ҙа был әңгәмә уға ҡыҙыҡ тойола һәм үҙенең бар асыуын баҫып, былай тип һорай:

- Улай булғас, әйт әле! Ни өсөн мине күреү менән барыһы ла ҡасыу яғын ҡарай? Тимәк, улар ғәйеплеме?

- Юҡ, батшам! Улар ғәйепле түгел! Әгәр бында ғәйепле бар икән – был һеҙ инде! Урман әһелдәрен яҡлау һәм ҡурсалау урынына, киреһен эшләй-һегеҙ. Шунан нисек улар һеҙҙе яратһындар ҙа, хөрмәт итһендәр!? Ҡәҙерле батшам! Тирә–яҡты ҡарағыҙ әле! Йәнлектәр араһында бер генә булһа ла дуҫығыҙ бармы, исмаһам? Барыһы ла һеҙҙән ҡурҡалар, һеҙҙән тайшана-лар. Һеҙ үҙегеҙҙең нәфрәтегеҙ менән генә тороп ҡалдығыҙ. Нәфрәтегеҙ һеҙҙе еңде! Үҙенең нәфрәтен еңә алмаған көсһеҙ батша нисек итеп ҙур урман һәм уның әһелдәре менән идара итә алһын инде!?

Батша өндәшмәй тыңлай. Ул уйлана ине. Ҡапыл уның күҙҙәре йәш

менән тула һәм илап ебәрә. Хәҙер ул элекке һымаҡ дәһшәтле һәм уҫал күренмәй:

- Бер ҡасан да бәләкәй генә ҡуян балаһы, күҙҙәремә ҡарап, дөрөҫлөктө битемә бәреп әйтер, тип уйламаным. Мин үҙемде көслө һананым. Кем көсһеҙҙәрҙе ҡурҡытып тота, шул – көслө, тип уйланым. Ысын көс – мәрхәмәтле йөрәктә икәнен белмәнем...

Ошо ваҡиғанан алып, Арыҫлан урмандың лайыҡлы батшаһы булырға вәғәҙә бирә.

Был хәлдең аҙағы ни менән бөтөрөн ҡыҙыҡһынып күҙәтеүсе йәнлектәр, йырткыстар, ҡош – ҡорттар, бөжәктәр ул китеү менән, ҡасып – боҫоп һәм йәшеренеп торған ерҙәренән бер – бер артлы сыға башлайҙар. Ҡыйыу ҡуянды ҡосаклайҙар, рәхмәт әйтәләр һәм мактайҙар. Ағас ботактарында ултырған ҡоштар һайрарға, тейендәр ҡоралайҙар менән кемуҙарҙан ҡыуышып уйнарға, айыу балалары тәкмәсләп көрәшергә тотона. Барыһы ла шатланалар, урман байрам төҫөн ала.

Шулай итеп, бәләкәй ҡуян балаһы уҫал Арыҫлан батшаны еңә. Әгәр ул ҡурҡыуын баҫып ысынбарлыҡты әйтә алмаһа, Арыҫлан үҙенең нәфрәтен еңә алмаҫ ине. Урман тормошо нисек күңелһеҙ, шомло ҡараңғылыҡта булған, шулай ҡалыр ине.

Шул көндән, ҡуян хөрмәткә эйә була һәм барыһының да яратҡан дуҫына әйләнә. Ә инде Арыҫлан рәхимле һәм мәрхәмәтле батша булып китә.



АҡЫЛЛЫ ДИҢГЕҘ ҡЫҘАЛАҺЫ ҺӘМ МӘКЕРЛЕ ҺИГЕҘАЯҡ (ОСЬМИНОГ)

Күптәнмелер - юҡмылыр, ҡасан булғандыр - белмәйем, бер диңгеҙҙең төбөндә бик мәкерле, яуыз уйлы, аҫтыртын холоҡло һигеҙаяҡ йәшәгән, ти. Ул көтмәгәндә, кем үтеп бара, шуға һөжүм итә торған булған. Һигеҙаяҡ бик оҫта йәшеренә белгән. Диңгеҙ төбөнә төшөп, оҙаҡ ҡына хәрәкәтһеҙ ятыр булған. Бәләкәй ҡыҫала һәм ваҡ балыҡтар өйөрөн шулай һағалаған ул. Аңғармаҫтан һөжүм итеп, үҙенең ағыулы һәрмәүестәре менән саҡҡан. Был юлбаҫар, үҙенә күңелһеҙ була башлаһа, хатта үҙенән эрерәк диңгеҙ әһалиҙәренә (йәшәүселәренә) һөжүм итергә лә тартынмаған. Әгәр инде үҙенә ҡурҡыныс янаһа, шул әҙере ҡасырға һәм тиҙ генә йәшеренергә лә өлгөрә икән.

Ҡомло диңгеҙ төбөндәге ҡаялар һәм ылымыҡтар арһында бик күп ҡыҫалалар йәшәгән. Улар иң йыуаш һәм иң зыянһыҙ йән эйәләре була. Көндәр буйы бер – береһе менән шаярышып уйнағандар. Ҡайһы саҡта уйын-көлкөләре

шаулыраҡ та булып китә, ләкин бер кемгә лә ҡамасауламағандар. Киреһенсә, диңеҙҙә көн күреүселәрҙе бындай изге күңелле һәм асыҡ фиғелле төркөмдән торған күршелек тик ҡыуандырған ғына.

Бер ваҡыт, ҡыҫалалар ғәмһеҙ генә уйнап йөрөгәндә, һигеҙаяҡ һиҙҙермәй генә боҫоп тегеләргә яҡынлаша. Ул ҡыҫалаларҙың баҫтырышып, бер – береһен ҡыуышып уйнағандарын, ҡабырғалары менән ҡыҙыҡ ҡына итеп шылып йөрөгәндәрен, ҡыҫҡыстарын шалт – шолт иттереүҙәрен һәм диңгеҙ төбөндәге ҡомдо болоттай күтәреп көрәшеүҙәрен иғтибар менән ҡыҙыҡһынып күҙәтә. Һигеҙаяҡ уңайлы ғына мәлдәе тап килтереп, ҡапыл уларға ташлана. Үҙенең йырҡыстарға ғына хас һәрмәүестәре менән бер нисә ҡыҫаланы эләктереп ала ла, үҙе менән һөйрәп алып китә. Ҡотола алған ҡыҫалалар төрлөһө төрлө яҡҡа сәселеп ҡасалар, ҡайһылары ҡая таштың ярыҡтарына инеп йәшеренә. Бер аҙ ваҡыт үткәс, ҡыҫалалар, ҡурҡыныс үтеүен күреп, ышыҡ урындарынан сығалар. Улар араларында күп кенә дуҫтарының юҡлығын күрәләр. Йөрәктәрен юғалтыу һәм юҡһыныу һағышы биләп ала. Ҡабат бер кемдең дә уйнап, күңел асҡыһы килмәй. Улар бергә йыйылалар. Тәпәйҙәре менән ҡағылып, бер – береһен тынысландырырға тырышалар. Урынлашҡан тәрән тынлыҡты боҙоп, хөрмәтле ҡарт ҡыҫала һүҙ башлай:

- Халҡым минең! Бөгөн мәкерле һигеҙаяҡ дуҫтарыбыҙҙың бер нисәүһен һәләк итте. Уларҙы юғалтыу – беҙҙең өсөн ҙур ҡайғы. Ошолай итеп, һаман да ҡайҙандыр ярҙам көтөп тик ултырайыҡмы?! Һигеҙаяҡтың башҡа килмәүенә

ышанысығыҙ бармы? Беҙгә бергәләп һигеҙаяҡҡа ҡаршы торор кәрәк. Уның өсөн бик һаҡ булыу һәм күмәкләшеп эш итеү мөһим!..

Ҡыҫалалар телдәре асылып кемуҙарҙан һөйләй башлайҙар:

- Беҙгә нимә эшләргә? Ниндәй ҡот оҫкос ҡурҡыныс һигеҙаяҡ ул? Унан нисек итеп һаҡланырға?

Ҡарт ҡыҫала ҡыҫҡыстарын юғары күтәреп тынлыҡ һорай:

- Мин – һеҙҙең арала иң олоһо! Үҙ ғүмеремдә күпте күрҙем. Һигеҙаяҡтан нисек һаҡланырға бер уй килде әле башыма!

Шулай итеп, ҡыҫалалар төркөмөндә йәшерен план барлыҡҡа килә. Улар, даими күҙәтеп торор өсөн, төрлө ергә ҡарауылдар ҡуялар. Һәр ваҡыт һигеҙаяҡ килеп сығыуы була, ҡарауылда торған ҡыҫала ҡыҫҡыстары менән ҙур ҡабырсаҡты күтәрә һәм уға өрә. Ҡурҡыныс барлығын белдереп, тирә – яҡты яңғыратып, ҡаты тауыш сығара. Ҡыҫалалар алдан әҙерләгән ышыҡтарына тиҙ генә йәшенешеп бөтәләр. Һигеҙаяҡ табышһыҙ китеп бара.

Ҡыҫалаларҙың был хәйләһе һигеҙаяҡты сығырынан сығара, асыуын ҡабарта. Ул хатта шартлар сиккә етеп ҡабара һәм нәфрәтенән ҡып – ҡыҙыл була. Ошо мәлдә, эргәһенән йөҙөп үтеп барған акулаға бар асыуы менән ташлана. Әммә үҙе саҡ акуланың ҡорбанына әйләнмәй. Уның йыртҡыс тештәренән саҡ ситкә тайпылып ҡала.

Мәрйендәр араһына йәшенгән ҡарт ҡыҫала, хайран ҡалып, һигеҙаяҡтың акулаға һөжүм иткәнен күҙәтә. Шул ерҙә яңы план барлыҡҡа килә лә инде. Әммә был план бик хәүефле була, сөнки ҡыҫаланы һигеҙаяҡ тотоп ашау ҡурҡынысы янай. Ҡарт ҡыҫала бер нәмәгә ҡарамай, үҙен дә йәлләмәй халҡын ҡоткарғыһы килә. Күп уйлап тормай акуланы эҙләп китә. Ә ул диңгеҙ төбөндә ял итеп яткан була. Ҡыҫаланы күреп ҡалыу менән, ауыҙын ҙур асып, уны йоторға әҙерләнә.

Ҡарт ҡыҫала ҡыҫҡыстарын өҫкә күтәреп:

“Хөрмәтле акула! – тип, ҡыҫҡырып һөйләй башлай ул. – Ашыҡмағыҙ әле! Башта мине тыңлағыҙ, аҙаҡтан ашарһығыҙ, теләһәгеҙ!”

Ҡарт ҡыҫала мәкерле һигеҙаяҡтың барыһын да ыҙалатканын һәм ялҡытканын һөйләй. Уның кәрәген биреп өйрәтеп алырға ваҡыт еткәнен аңлата. Үҙенең һигеҙаяҡты нисек итеп тоҙаҡҡа эләктереү планын асып бирә. Тик хөрмәтле акуланың ризалығы кәрәклеген әйтә.

Һигеҙаяҡ тураһында һөйләгәндәрен ишеткәс, акула ҡыҫаланы ашамаҫҡа була. Ул һигеҙаяҡҡа ныҡ асыулы була һәм уның һабағын уҡытып алырға ҡаршы килмәй - киң йылмайып, кинжалдай үткер тештәрен шаҡылдатып, ризалығын бирә. Ҡыҫалалар һигеҙаяҡты әүрәтергә, ә акула йәшенеп көткән еренән сығып һөжүм итергә килешәләр.

Килешеү буйынса, икенсе көндө ҡыҫалалар шаулы уйындар ҡороп, үҙҙәренең ғәҙәттәге урындарында күңел асыуҙы дауам итәләр. Улар һигеҙаяҡтың иғти-

барын яуларға тейештәр ине. Королған план эшләй башлай, тиҙҙән һигеҙаяҡ та күренә. Ҡыҫалалар акула йәшенгән тарафҡа ҡаса башлайҙар. Һигеҙаяҡ уларҙы ҡыуа төшә. Ҡапыл ғына уның алдында акула пәйҙә була. Һигеҙаяҡ тоҙаҡҡа эләккәнен аңлай. Хәҙер ҡасырға уға сират етә. Әммә акула һигеҙаяҡтан йылғырыраҡ була, ул уны ҡыуып етә лә үҙенең үткер тештәре менән эләктереп ала. Һигеҙаяҡ һәрмәүестәре менән бар көсөн йыйып ҡаршылашып маташа. Уның бер һуғыуы акуланың күҙенә тура килә һәм акула бер мәлгә генә таҫыллығын юғалта. Һигеҙаяҡҡа уның үткер тештәренән ысҡынырға мөмкинселек тыуа һәм ул бар көсөн йыйып, бәләкәй һыу аҫты мәмерйәһенә инеп йәшеренә.

Акула бик оҙаҡ эҙләй уны, ләкин таба алмай. Һигеҙаяҡ бик оҫта итеп йәшеренергә белә бит, шунлыҡтан ул тере ҡала. Акуланан алған тәрән яралары уға бик ҙур һабаҡ була. Сөнки башҡаларға һөжүм итеп ыҙалатмаһа, был хәлгә төшмәҫ ине. Һигеҙаяҡ был урындарҙы ташлап ҡайҙалыр китә, башҡа уны күреүсе булмай. Ҡыҫалалар тыныс ҡына йәшәй башлайҙар. Улар, уңыш һәм еңеү өсөн һәр эштә лә, төплө һәм аҡыллы итеп төҙөлгән пландың мөһимлеген һәм дуҫтарының ярҙамы кәрәклеген аңлай.

ХЫЯЛЫЙ БЕСӘЙ

Ҡайҙалыр алыҫ-алыҫ бер ерҙә, беҙ белмәгән бер илдә, йәшәгән, ти бер бесәй. Ул шул хәтлем хыялланырға яратҡан. Уның иң ҙур хыялы – бер ҡапҡала йәшәгән ҙур йөнтәҫ эт унан ҡурҡһын өсөн - көслө һәм ҡыйыу булыу. Бесәй өйҙән сыҡҡан һайын эт өрә–өрә уны баҫтырырға тотона. Бахыр бесәйгә ҡойроктарын ҡабартып, өмөтһеҙ тауыш менән аҡырып, бейек ҡойма башына үрмәләүҙән башҡа сара ҡалмай. Ярай әле эттәр ҡоймаға менеп, ҡойма буйлап йөрөй белмәй!

Хыялға бирелеп ултырған бесәй бар донъяһын онота! Ул шул тиклем ялҡаулана, хатта сыҫҡандарҙы ла тотмай башлай. Ә сыҫҡандар әҙәпһеҙлектең сигенә етәләр, хатта бесәйгә иғтибар ҙа итмәй башлайҙар. Келәттән һәр саҡ уларҙың ҡыштырлауы ишетелеп тора. Хужа бесәйгә ҡарай – ҡарай уны шелтәләй:

- Ниндәй ялҡау бесәй булдың әле? Тиҙҙән сыҫҡандар башыңа ла

менеп ултырып, мыйыҡтарыңдан да тартҡылай башларҙар! Былай дауам итһә, урамға ҡыуып сығарам!

Хужанан был һүҙҙәрҙе ишетеү оят булһа ла, бесәй хыялланыуҙан туҡтай алмаған. Урамға сыҡһа, йән-яғына хәүефләнеп ҡараған, эткә һиҙҙермәй генә йөрөргә тырышҡан.

Әммә эт һәр саҡ уны һиҙеп ҡала ла, өрә-өрә баҫтырырға тотона. Бесәй этте нисек итеп еңеп алырға, тигән теләктән башҡа бер нәмә тураһында ла уйлай алмай.

Хужа бесәйенең ялҡау булыуына, сыҫкандарға иғтибар ҙа итмәүенә бик асыу килә. Тиҙҙән вәғәҙәһен үтәй, бесәйҙе урамға ҡыуып сығара.

Шулай итеп, буш хыялдары арҡаһында, ул өйһөҙ ҙә тороп ҡала. Урамдағы ҙур ағас төбөндә: "Был ҡурҡыныс эт мине күреп ҡалыу менән баҫтыра башлай. Шуға көслө һәм ҡыйыу булып, ҡурҡыуынан миңә теймәүен уйлап хыялландым. Ләкин хыялдарым тормошҡа ашманы, улар миңә ярҙам итмәне. Бына хәҙер өйһөҙ ҙә тороп ҡалдым! Мяу-мяу!"- тип ҡайғырып ултырғанда, теге эт уны күреп ҡала, ҡапҡа эсенән нисек урамға сығыу юлдарын эҙләй. Ул саҡта рәхәтләнеп бесәйҙе баҫтырыр ине! Тап ошо мәлде хужаның әсәһе баҙарҙан ҡайтып инә. Ул ҡапҡанан инеп, алған нәмәләрен өйгә ташыған арала, эт урамға сығып та һыҙа һәм бесәйҙең артынан саба. Бесәй йөндәрен ҡабартып, уҡ кеүек ағас башына атыла. Ағас төбөндә тороп ҡалған эт, өрә–өрә ағасты урап йөрөй.

Урамдағы шау–шыуҙы ишетеп, нимә булғанын асыҡлар өсөн, хужа килеп сыға. Ағас тирәләй ярһып өргән этен һәм ағас башында ҡурҡышынан күҙҙәре түп–түңәрәк булған бесәйен күрә. Меҫкен бесәйҙең күҙҙәренән йәш тәгәрәп, шым ғына илай, мыяулап ҡына ярҙам һорай ине.

Ошо мәлдә хужа бесәйенең ауыр яҙмышын аңлай. Үҙ йортондағы йән эйәләренең нисек йәшәүҙәренә иғтибар бирмәүенә уңайһыҙланып, оялып китә. Ҡапҡа эсендә тәртип булмағанға күрә, бесәй бахыр яфаланған. Хужа этенә асыу менән ҡыскыра. Ғәйепле эт, ҡойроҡтарын ҡыҫып, ояһына инеп боҫа. Хужа бесәйҙе ағас башынан төшөрөп, йомшаҡ йөндәренән һыйпай – һыйпай уны йыуатып тынысландыра: "Эй бахыр бесәй! Әгәр эт менән икегеҙҙең араһындағы ыҙғышты белгән булһам! Хәлең был хәтлем насар булмаҫ ине! Исмаһам, бер тапҡыр булһа ла ошаҡлаһаң, мин эткә һине рәнйетергә юл ҡуйыр инемме?"

Хужа этен сылбырға бәйләп ҡуя: "Үҙеңде тәртипле тоторға өйрәнгәнсе, сылбырҙа ултырып тор әле, дуҫкайым!" – ти ул.

Ә бесәйҙе өйгә кире индерә. Хәҙер уға эт ҡурҡыныс түгел. Бесәй хыялланыуын ташлап, тырышып сыскандар тота башлай. Уның бер ҡасан да тормошҡа ашмаҫ хыялдары файҙаһыҙ, ваҡытты бушҡа әрәм итеү генә

булған икән! Сөнки, бер генә бесәй ҙә ҙур уҫал этте еңә алмай. Уға яклауҙы үҙен яратҡан хужаһынан эҙләр кәрәк ине.

Ошо ваҡиғанан һуң, кистәрен хужа йылы мейес эргәһенә урынлаша, ә бесәй уның тубыҡтарында ятып йоҡомһорай.

КОРОЛЕК ИСЕМЛЕ БӘЛӘКӘЙ ТУРҒАЙ СӘЙӘХӘТЕ

Кеше аяғы баҫмаған, кеше - фәлән күрмәгән бер ҡара урманда, йәшел шыршылар арһында, йәшәгән ти, Королек исемле кескәй генә бер турғай. Ул шундай бәләкәй булған, хатта, беҙҙең яҡтағы ғәҙәттәге турғайҙар менән сағыштырғанда, улар күпкә ҙур күренгән. Башында тажға оҡшаған һары өлтөк йөрөткән. Ошо һары тажлы өлтөгө өсөн дә Королек исемен алған да инде.

Көндәр буйы ботаҡтан – ботаҡҡа һикереп, иҫ киткес матур йырҙарын йырлаған. Ә кистәрен үҙенең бәләкәй, ыҡсым ояһына ҡайткан. Шулай үткән ошо кескәй ҡоштоң көндәре.

Был урманда йәшәү уға бик оҡшаған. Шулай ҙа, ҡайһы саҡта уны ҡайҙалыр сәйәхәткә сығып китеү хыялы тарткан, ҡайҙалыр алыҫтағы икенсе ерҙәрҙе күргеһе килгән. Был теләк көндән – көн көсәйгән.

Бына матур бер көндә, үҙенең ыҡсым ояһынан етеҙ генә осоп сыға ла, бер ҡасан да күрмәгән яҡтарға юл ала. Оса торғас, алдында күкһел

төҫтәге ҡалҡыулыҡтар һәм уның артында – ҙур урман күренә. Ҡошсоҡҡа был яңы урын бик оҡшай. Аҫтында сәскәле гөлъемеш ҡыуағы үҫкән йәш ҡарағайҙы һайлап ала ла, ҡуйы ботағына ҡуна. "Тирли–тирли! Ниндәй матурлыҡ бында! Тирли–тирли! Йәшәргә ошонда урынлашайым да ҡуяйыммы икән?" – тип күңелле тауыш менән йырлап ебәрә. Королек ҡарағайҙың олоно буйлап бер өҫкә менә, бер аҫҡа төшә. Шунан гөлъемеш ҡыуағына төшөп, тикшереп ҡарап сыға. "Был урын буш күренә, ошонда оя ҡорайым әле", - тигән ҡарарға килә лә, эшкә тотона. Ҡарағайҙың киң тарбаҡлы ботаҡтары араһына үҙенең бәләкәй генә түңәрәк ояһын ҡора башлай. Төҙөлөш материалдары итеп мүк, үләндәр, һығылмалы йәш ботаҡтар ҡуллана. Ә оя төбөн йомшаҡ мамыҡ менән төпләй. Бына хәҙер оя әҙер!

Королек үҙенең яңы йорто менән бик ҡәнәғәт ҡала. Уны тирә–яҡтағы һәр нәмә ҡыуандыра һәм һоҡландыра. Ағастың иң юғары осона пырхылдап осоп менә лә, шатлыҡлы ауаздарҙан торған йырын һуҙа: "Тирли–тирли! Был урман ниндәй матур! Был ҡарағай ниндәй моһабәт... Уның ботағына төҙөгән йортом нидәй йәтеш һәм күркәм! Был ерҙәргә килеп урынлашҡан көнөм ниндәй бәхетле!" Ҡош үҙенең асыҡҡанын тоя һәм серәкәй, себен, бөжәктәр эҙләп, һунарға оса.

Ул осоп китеү менән, үләндәр араһында нимәлер ҡыштырлай. Ялтырап йылан килеп сыға. Бөтә тәне менән һығылып–бөгөлөп, ауыҙынан асаланған телен алға ырғыта–ырғыта, тиҙ генә шау сәскәгә күмелгән гөлъемеш ҡыуағына шыуыша һәм уның аҫтындағы өңөнә инеп сума. Меҫкен бәләкәй

ҡош, ояһын төҙөгәндә, ҡайҙан ғына белһен инде шундай ҡурҡыныс күр-шеһе буласағын!?

Белеүебеҙсә, йыландар еҫте нык һиҙәләр. Улар хатта иң көсһөҙ еҫтәрҙе лә яҡшы айыралар. Был һиҙеү – уларға үҙҙәренең табыштарын табырға, йәки дошмандарының яҡынлашыуын аңғарыр өсөн бик мөһим.

Эҫелектән ҡасып өңөнә ингән йылан ишелеп-ишелеп бөгәрләнеп кенә ятҡайны, ҡапыл уға ниндәйҙер таныш булмаған ят еҫ килеп бәрелде. Өңөнән башын сығарып йән-яғына ҡараны, еҫ өҫтән килә ине. Йылан һалмаҡ ҡына өңөнән һурылып сыҡты ла, ағастың олоно буйлап өҫкә шыуып үрмәләне. Ул ҡарағай ботаҡтары араһындағы бәләкәй генә ояны шәйләне һәм шул тиклем аптыраны, хайран ҡалды. “Был оя ҡайҙан барлыҡҡа килгән? Быны ҡорған ғәмһеҙ ҡош ҡайҙа икән? Ярай! Шулай итеп, кем йәшенмәгән – мин ғәйепле түгел!” – тип уйланы мәкерле йылан.

Йылан ағастың тармаҡлы ботаҡтары араһына инеп боҫто һәм ояның хужаһын һағалар өсөн йәтешләп ятты.Тиҙҙән бәләкәй ҡош ояһына осоп килде лә өй мәшәкәттәре менән булыша башланы. Ул хатта, йыландың мәкерле уй менән уға табан шыуышҡанын һиҙмәне лә, хәүеф барлығына ла шикләнмәне. Ә йылан өҫтәге ботаҡтарға эләгеп күсә–күсә яй ғына ояға таба шыуыша ине. Шул мәлде Королек уны күреп ҡалды. Ҡурҡышынан өмөтһөҙ сырылдай–сырылдай фырылдап осоп сыҡты ла, башы һуҡҡан яҡҡа ташланды. Уның бәләкәй генә йөрәге күкрәгенән һикереп сығырҙай

булып, дөпөлдәп тибә ине. Ситкә китеп, әҙерәк тын алғас, сәтләүек ағасының бер ботағына барып ҡунды.

Ошо мәлдә, аҫта кемдер берәү уға өндәште: "Эй Королек! Нимә булды һиңә? Хатта ҡауырһын – йөндәрең тырпайып үрә торған! Кем шул хәтлем ҡотоңдо алды?" Был, ергә ҡойолған сәтләүектәрҙе йыйырға сыҡҡан ҡыҙғылт һары ерән тейен ине. Королек тейенгә үҙенең башынан үткәндәрен түкмәй–сәсмәй һөйләп бирә.

Тейен уға: "Хәҙер тыңла мине! Үҙеңдең тыуған яҡтарыңа, үҙ йортоңа кире ҡайт! Был, әлбиттә, матур урын, ләкин – тыныслыҡ юҡ. Һәр минут һайын һине ниндәйҙер бәлә һағалай. Мин дә бында йәшәмәҫ инем, аҙыҡтың күплеге генә мине тота. Иң ҡурҡҡаным – белмәгән ергә күсенеп китеү. Бәлки унда бындағынан да насарыраҡтыр!?"

Королек уйға ҡалды: "Шик юҡ! Был ерҙәрҙә йәшәүе бик хәүефле икән! Тейен дә өйрәнгән ерҙәренән сит ерҙәргә китергә икеләнә. Ә мин, сәйәхәт яратыуым сәбәпле, ниндәй матур, ыҡсым, уңайлы, тыныс оямды ҡалдырып сығып киттем. Белмәгән ерҙә урынлашып, оя ҡороп ебәргән булдым. Һөҙөмтәлә, саҡ үлмәй ҡалдым,"- тине лә, йәһәт кенә үҙенең тыуған яғы тарафтарына осто.

Был ваҡиғанан һуң, ул бер ҡасан да үҙ ояһын, тыуған яҡтарын ташлап сит яҡтарға ынтылманы.



ЯҢҒЫҘ ҠОРАЛАЙ

Бер урманда йәшәгән, ти ҡоралай. Уның бәләкәй генә болан икәнен беләһеңдер ул? Алтынға мансылғандай матур туны, бәләкәй генә осло тояҡтары һәм оҙон керпекле ҙур ҡара күҙҙәренән тыш, ул бик етеҙ һәм аҡыллы ла булған.

Уның күңеленә яҡын яҡын дуҫтары һәм әхирәттәре булмаған, шуға күрә уны яңғыҙлыҡ ыҙалатҡан. Башҡа ҡоралайҙар менән танышып ҡараған ул. Ләкин һәр саҡ уларҙан ниндәйҙер етешһеҙлектәр табыр булған. Береһе ҡомһоҙ, икенсеһе хәйләкәр, ә өсөнсөһөнөң тун төҫөн, йәки моронон оҡшатмаған. Шулай итеп, тағы япа – яңғыҙ тороп ҡалған. Уйсан ғына урманды гиҙгән бер көндө, ҡоралай бер аҡланға барып сыға. Ул аҡланда бер көтөү етеҙ ҡоралайҙар көтөүенә юлыға. Йәш ҡоралайҙар һикерешеп шаяралар, бер – береһен баҫтыралар һәм йәшенеш уйнайҙар ине. Яңғыҙ ҡоралай күңелһеҙләнеп һәм көнләшеп ҡуйы сәтләүек ҡыуаҡтары аша уларҙы оҙаҡ ҡына күҙәтеп тора.

Шул ваҡиғанан һуң бик күп көндәр үтә. Бер ваҡыт, беҙҙең ҡоралай, урманда үҙе кеүек үк яңғыҙ ҡоралайҙы осрата. Улар дуҫлашып китәләр.



Көн дә осрашалар, бергәләп уйнайҙар һәм урман буйлап саф һауала йөрөйҙәр. Бер көндө, иртә менән урмандың аръяғында үҫкән люцерна яланына барырға килешәләр. Ҡоралай һөйләшелгән урынға килеп бик оҙаҡ ҡына әхирәтен көтә. Әммә дуҫы күренмәй. Ҡоралай уға үпкәләй һәм дуҫлыҡтарын өҙә. Ул хатта әхирәтенең ни өсөн килмәү сәбәбен дә белергә теләмәй. Бәлки ул берәй бәләгә тарығандыр? Бәлки ул ауырып киткәндер? Бәлки уға ярҙам кәрәк булғандыр? Дуҫтар шулай ҡыланмай бит!!!

Ҡоралай бөтөнләй яңғыҙ тороп ҡала.

"Был урманда ни өсөн береһе менән дә дуҫлаша алмайым икән? Элекке әхирәттәрем миңә бөтөнләй оҡшамай. Миңә лайыҡ булған бер генә лә әхирәт булмаған ниндәй урман булды әле? Улай булғас, был урындан тиҙерәк китер кәрәк!" – тигән уйға килә лә, башы һуҡҡан яҡҡа сығып китә. Әҙмелер, күпмелер барғандыр – таштар араһынан селтерәп кенә аҡҡан шишмәгә юлыға. Һыуһынын баҫыу теләге менән шишмәгә яҡынлаша һәм үҙенә мөләйем ҡараш менән баҡҡан оло ҡоралайҙы осрата. Оло ҡоралай сәләм биреп башын һелкә лә: "Ниндәй уйҙар борсой был йәш ҡоралайҙы?" – тип һорай, хәстәрле ҡараштары менән уның хәсрәт тулы һағышлы күҙҙәренә бағып. Беҙҙең ҡоралай үҙенең яңғыҙлығы, үҙ урманында насар ғәҙәттәре булмаған, уға лай-

ыҡлы әхирәт таба алмай ошо яҡтарға һәйбәт әхирәт эҙләп килеп сығыуы тураһында һөйләй.

Аҡыллы оло ҡоралай уны иғтибар менән тыңлай, башын сайҡай һәм йылмайып:

- Эх, йәш Ҡоралай! Был донъяла бит етешһеҙлеге булмаған бер зат та юҡ! Ә кем дә кем, бигерәк тә кемдеңдер кәмселектәрен табып бәйләнһә, тик өлгөлө үрнәк булырлыҡ дуҫтар эҙләһә, ғүмере буйына яңғыҙ ҡалыуы мөмкин. Ә үҙеңдең кәмселектәрең юҡлығына ышанаһыңмы һуң?

Оло ҡоралайҙың аҡыллы һүҙҙәре йәш ҡоралайға был донъяны бөтөнләй икенсе күҙ менән күрергә ярҙам итә. Йәш ҡоралай, үҙенең аҡыллы әңгәмәсеһенә ысын күңелдән рәхмәтен белдереп, ҡыуанысынан һикереп –һикереп ала. Ерҙән дүрт тояғы менән дә өҫкә атылып, бәләкәй генә ҡойроғон болғай – болғай, бар көсөнә тыуған урманына таба саба.

Тыуған урманына ҡайтыу менән, элекке әхирәттәренең барыһын да күреп, ғәфү үтенә һәм улар менән кире татыулаша. Ул әхиәрәттәрен нисек бар, шулай яратырға, ә кәмселек эҙләмәҫкә кәрәклеген аңлай. Шул көндән алып, ул бик күп дуҫтар таба, улар араһында ҡәрҙәш ҡоралайҙар һәм урманда йәшәүсе башҡа йәнлектәр ҙә өҫтәлә.

МӘРХӘМӘТЛЕ ҡУЯН

Матур ғына йәшел урманда йәшәгән, ти бер ҡуян. Ул шул хәтлем шәфҡәтле, рәхимле, мәрхәмәтле һәм изге күңелле була. Уны бөтә урман әһелдәре белә һәм яраталар, сөнки ул барыһына ла һәр сак изгелек эшләй торған булған...

...Һалҡын ғына күкһел томан таралып та өлгөрмәгән бер иртәлә, ҡуян үҙенең йәшерен урында эшләнгән ояһынан сыға. Һелкенеп ала, тәпәйҙәре менән моронон таҙарта, һоро йөндәрен һыйпап тигеҙләй ҙә, ашыҡмай ғына урман төпкөлөнә инеп юғала. Бәлки, бөгөн дә кемгәлер уның ярҙамы кәрәк булыр, тип уйлай ул.

Бәлә аяҡ аҫтында, тигәндәй, аңғармаҫтан ҡуян сәнскеле шайтан таяғы үләненә баҫа. Үләндең сәнкеле энәләре уның табанына аяуһыҙ ҡаҙалғас, меҫкен ҡуян һыҙланыуынан түҙмәй ҡыскырып ебәрә һәм арҡаһына ауып тәгәрәп китә. Һыҙланыуҙары бер аҙ баҫылғас, сәнскеләрҙән арынырға теләп тәпәйҙәрен һелкә, улай ҙа булмағас, һурып сығарырға ла

маташа. Ләкин нисек кенә тырышмаһын, сәнскеләр ҡаҙалған урындарында ҡалып, тағы ла нығыраҡ һыҙландыра.

Табандары яраланыу арҡаһында, ҡыбырларға ла мөмкинселеге булмаған ҡуян, башҡаларҙан ярҙам өмөт итеп, бик күп ваҡыт көтөп ултыра. Өмөтө өҙөлдө тигән дә генә, яҡындағы ҡыуаҡлыҡтар шаулап һелкенә башлай һәм көрән һоро айыу күренә. Ҡуян шул тиклем шатлана, уға былай ти:

- Әссәләмәғәләйкүм, айыу туған!!! Табандарыма сәнскеләр инде, шуны һурып алырға, зинһар өсөн, ярҙам итеп ебәрегеҙ әле! Урынымдан да ҡуҙғала алмайым... түҙергә хәлем дә ҡалманы...

Айыу ҡурай еләге ашарға бик ашыға ине. Уны тәмле,баллы ҡурай еләге көткәндә, башҡа нәмәләргә иғтибар бүлергә теләге юҡ ине айыуҙың. Шуға ҡуянға асыулы ҡарап мығырҙаны:

- Эйе шул! Һинең менән генә булашырға, минең башҡа эштәрем юҡ тип уйлайһыңмы?

Ул хатта туҡтап та тормай, үҙ юлын артабан дауам итте.

Башҡалар көнөнә ҡалып, ярҙамһыҙ хәлдә, ҡуян көндө үткәрҙе. Кис етте. Төн ауышты... Тәпәйҙәренең һыҙлауы, төнгө урмандың төрлө ҡурҡыныс ауаздары уға йоҡларға ирек бирмәне. Сөнки, ул йырткыстарға еңел табыш булыр ине. Төнөн баш осонда ҙур ҡанаттарҙың ауыр итеп һуғыуы,

йә үлән араһында ҡыштырлауҙар, йә йырткыс ҡош һәм йәнлектәрҙең ҡотто осороп ҡысҡырыуҙары – барыһы ла уны шомландырҙы, хафаға һалды. Шулай ҙа ул тыныс һәм түҙемле булырға тырышты. Сөнки, кем түҙә, шуға ҡасандыр ярҙам килерен белә ине ҡуян. Бына таң да ата башланы. Һәм... ниндәй мөғжизә!?! Яҡындағы ҡайын ағасына ем эҙләп осоп барған ҡарға килеп ҡунды. Ҡуян уны саҡырҙы:

- Ҡарға апай! Бер яҡшылыҡ эшлә әле! Ярҙам ғына итеп ебәр әле миңә! Тәпәйҙәремдәге сәнскеләрҙе һурып ҡына сығар әле, зинһар өсөн!

- Кем унда? – тауыш сыҡҡан тарафҡа ҡарға иғтибарлы ҡарашын төбәне. – Ҡуян туған, әллә һин инде? Ысынлап та һин шул! Ҡарр! Шундай ҙур бәләгә тарығанһың икән! Тәпәйҙәреңдә ниндәй оҙон сәнскеләр тырпайып тора! Ҡуян туған, һин минең оянан ҡолап төшкән ҡошсоғома нисек ярҙам иткәнеңде онотманым! Әлбиттә, ярҙам итәм, хәҙер итәм!

Ҡарға ергә осоп килеп төшә лә, ҡуяндың табандарынан энәләй осло сәнскеләрҙе суҡышы менән һурып та ала. Ҡуян ҡарғаға ҙур рәхмәттәрен әйтеп, аҡһай – аҡһай үҙ өңөнә ҡайтып ауа. Бер нисә көн үткәс, уның яралары төҙәлә, хатта яра урындарының эҙе лә ҡалмай. Кемгәлер ярҙам кәрәкмәйме икән, тип борсолоп, ул тағы урманды ҡыҙырырға сыға.

Ҡапыл таныш булмаған сит еҫ уны һағайырға мәжбүр итә. Ҡуян йән – яғына ҡарана һәм ҡуйы ҡыуаҡтар араһына йәшенгән һунарсыны күреп ҡала. Һунарсы бар донъяһын онотоп тәмле ҡурай еләген ашап ләззәтлән-

ған айыуға мылтығын тоҫкап маташа ине. Айыу эргәһендәге хәүефте хатта һиҙмәй ҙә, еләк ашауын дауам итә. Был тайыштабан - ҡуянға ярҙам кәрәк-кән мәлдә, эргәһенән туктамай ҙа үтеп киткән айыу ине. Үтә лә рәхимле холоҡло ҡуян айыуға булған үпкәһен иҫенә төшөрөп тә, күп уйланып та тормай. Эргәһендәге аҡланға һикереп сыға ла, һунарсының күҙ алдында түңгәктәрҙе урай - урай йүгерергә тотона. Һунарсы айыуға атырғамы, әллә ҡуянғамы, тип ҡаушап юғалып ҡалған арала, ҡуян айыуға: "Ҡас, тиҙерәк", - тип ҡыҫҡыра ла, үҙе шыршы артына һикерә. Йомғаҡ булып бөгәрләнеп тәрән булмаған йырынға тәгәрәй һәм юҡ була. Айыу ҡыуаҡтарҙы тапап һындыра – һындыра, эре аҙымдар менән йүгереп урман шырлығына инеп юғала. Һунарсы ауыҙын асып, аптырап, бер нәмәһеҙ тороп ҡала.

Был ваҡиғанан һуң бер нисә көн үткәс, айыу ҡуянды эҙләп килеп таба һәм ҡоткарғыны өсөн ысын күңелдән уға рәхмәттәрен белдерә. Рәхмәт йөҙөнән ҡуянға бер тырыз һауыт тәмле ҡурай еләген бирә һәм: "Ҡуян туған! Теге ваҡыт һиңә ярҙам ҡулын һуҙмағаным өсөн миңә шул хәтлем оят. Ә мин бәләгә юлыҡҡанда, һин хатта был турала иҫләп тә торманың, ярҙамға ташландың! Мин хәҙер һәр ваҡыт изге эштәр генә эшләргә, башҡаларға ярҙам ҡулын һуҙырға, ә яуызлыҡты йөрәктә алып йөрөмәҫкә, кисерә лә белергә кәрәклеген аңланым!" – ти. Ошо көндән алып, ҡуян менән айыу, бергәләп тик яҡшы ғәмәлдәр генә ҡылырға һүҙ ҡуйышып, йылмайышып бер – береһенең ҡулдарын ҡыҫалар.



ТЫҢЛАУҺЫҘ ӨЙРӘК БӘПКӘҺЕ

Биик алыҫ бер ерҙә, Африка тигән илдә, зәңгәр күлдең ярында йәшәгән, ти өйрәктәр ғаиләһе: атаһы, әсәһе һәм күптән түгел йомортканан ярылып сыҡҡан бәләкәй генә өйрәк бәпкәһе. Бәпкә алтын төҫөндәге йомшаҡ йомарсыҡҡа оҡшаған ине, сөнки улар йомшаҡ мамыҡ йөн менән тыуалар, тик аҙаҡ ҡына ҡауырһындары барлыҡҡа килә.

Өйрәктәрҙең ояһы һыуҙан алыҫ булмаған ерҙә, ҡасандыр дауылда ауған ағасты уратып үҫкән ҡуйы ҡамышлыҡ эсендә ине. Атаһы менән әсәһе үҙҙәренең йомшаҡ малайҙарын нык яраталар һәм һаҡлайҙар. Уға күлгә яҡын барырға һәм һыуға төшөргә ҡәтғи рәүештә тыйыла. Улар: “Улым! Күлгә төшмә күрмә! Унда гепард, арыҫлан, фил, зебра исемле

ҡырағай ат тоҡомдары, антилопа, юлбарыҫ һымаҡ ҙур йырткыс хайуандар һыу эсергә төшәләр. Йә тапап, йә ашап, йә йотоп ҡуйырҙар!”- тип иҫкәртеп кенә торалар.

Ата – әсәһе йоҡлаған иртә таң менән, аңһыҙ өйрәк бәпкәһе ояһынан сығып күлдең ярына килә. “Атай менән әсәй әле уянмаған, ҡурҡыныс йырткыстар ҙа йоҡлайҙар. Хәҙергә ҡурҡыныс янамай. Тик бер генә күҙ менән ҡарайым да, береһе лә һиҙмәй ҡалыр, кире инем ятырмын!”- тип фекер йөрөтә тыңлауһыҙ өйрәк бәпкәһе.

Таң һарыһы күренә башлауға, күл өҫтөндә күкһел томан йәйелгән ине. Һалҡын еләҫлек һиҙелә. Күл дә әле тәмле йоҡоһонан уянмаған һәм уның йоҡоло тын алышы яр буйындағы ҡыуаҡлыҡтарҙы, ҡамыштарҙы, үләндәрҙе үҙ ҡосағына алған кеүек тойола. Тик ҡайҙалыр алыҫта, һыу өҫтөндә тегеләй – былай йөрөгән сиңеркәләрҙе тоторға ниәтләнгән балыҡтарҙың һыу сәсрәтеп сәпелдәүе, ҡарпыуы ғына ишетелә ине.

“Ә бында матур! Һыу ҙа шул хәтлем күп икән!! Атай менән әсәйҙең

күлдә йөҙөргә рөхсәт итмәүҙәре дөрөҫ түгел! Мин бит һәйбәт йөҙәм һәм сума ла беләм!"– тип уйлай өйрәк бәпкәһе. Тәпәйҙәре менән шапылдай – шапылдай һыуға инә һәм күлдең уртаһына йөҙөп китә. Туйғансы йөҙөп, хәлдән тайғансы сумып, бәпкә өйгә ҡайтыу ниәте менән ярға табан ынтыла. Һәм ошо мәлдә уны ҡапыл ҙур тулҡын өҫкә ташлай. Ауыр ҙур нәмәне күлгә ташлағандай, күл өҫтөндә тулҡындар барлыҡҡа килә. Бәпкә, көҙгөләй тигеҙ күлдең ҡаршы ярынан, һыу өҫтөн икегә ярып, үткер тешле ауыҙын ҙур асып, уға табан крокодилдың йүнәлгәнен шәйләп ала.

Ҡото оҫкан бәпкәнең кескәй генә йөрәге бәләкәй моторҙай дерелдәй башланы. Ул аяныс өмөтһеҙ тауыш менән: "Крря! Крря! Әсәй!"- тип ҡыҫҡыра – ҡыҫҡыра бар көсөнә тәпәйҙәре менән ярға табан ишергә тотона. Аңра ғына бәләкәй өйрәк бәпкәһе ҙур ҡанһыҙ йыртҡыс крокодил менән ярыша аламы һуң? Крокодил килеп етеп бәпкәне эләктәрә инде тигәндә, ҡапыл мылтыҡ тауышы яңғырай. Крокодил ҡатып туҡтап ҡала, күл өҫтөнә бүрәнә һымаҡ һуҙылып ята... тулҡындар уның кәүҙәһен тирбәтергә тотона... Баҡтиһаң, һунарсы кисәнән алып уны аңдып күҙәт-

кән икән. Ә аҡылһыҙ өйрәк бәпкәһе күл өҫтөндә уйнап- шаярып үҙе лә уйламаҫтан, йырткысты йәшеренеп ятҡан еренән сығырға мәжбүр иткән.

Атыу тауышы шаңдау булып бөтә тропик далаға тарала һәм ундағы көнитеүселәрҙе ығы – зығы тыуҙырып ҡуҙғыта. Таңғы һиллек быжҡылтау, саңҡылдау һәм ҡаңғырған ҡош – ҡорттарҙың сөрөлдәү, шыҡырлау ауаздары менән тула. Бәпкәнең ата – әсәһе малайҙарын яндарында күрмәгәс, уны эҙләргә ташланалар. Ҡурыҡҡан, ҡалтыраған бәпкәне ҡороған үләндәр ҡаплаған түңгәк аҫтынан табып алалар. Тыуған өйөнә ҡайтып тынысланғас ҡына, ата – әсәһенә үҙе менән булған мажараларҙы һөйләп бирә. Улының һөйләгәнен тыңлап бөткәс, атаһы ҡәтғи рәүештә былай тип әйтә: "Улым! Әгәр беҙ, һинең атайың – әсәйең, нимәлер рөхсәт итмәйбеҙ икән, шуны белеп ҡуй, тимәк беҙ һине яратабыҙ, һине ҡурсалайбыҙ һәм тик яҡшылыҡ ҡына теләйбеҙ! Бөгөн беҙҙең әйткәнде тыңламау сәбәпле, саҡ һәләк булманың бит! Зинһар өсөн, иҫеңдә тот, ата – әсәйҙе тыңлау, һәр - саҡ үҙеңә файҙаға ғына булыр"...

Ҡамҡа (божья коровка)

Ҡыҙыл ҡанаттары ете ҡара нөктәләр менән биҙәлгән был бәләкәй генә бөжәкте яҡшы беләһеҙҙер ул? Уны төрлө ерҙә төрлөсә исемләйҙәр. Биҙәкле ҡуңыҙ, Ҡояш апай, Ҡыр һыйыры, Сыбар һыйыр, Ҡамҡа, Ҡыҙыл ҡандала, Ҡылайтун һәм башҡа бик күп исемдәр менән атаһалар ҙа, уның киң таралғаны - Ҡамҡа булыр!

Әгәр ҙә уны усыңа ултыртып: "Эй! Ҡамҡа,Ҡамҡа! Осоп кит һауаларға! Икмәк әпкил балаларға!"- тип һамаҡлаһаң, ысынлап та, ҡанаттарын йәйеп, осоп та китә. Ҡайһы саҡта, үҙенең бөжәктәр эше менән осоп арыһа, ял итеп алыр өсөн, кемдеңдер кейеменә, йә ҡулына килеп ҡуныу осраҡтары ла була.

Уның ҡуныуын күптәр ҙур уңышҡа, ҡыуанысҡа юрайҙар...

... Ҡасандыр, бииик борон заманда, бер ауылда баҡсалар үҙтергән,

балыҡ тотоп, кейектәр аулап, ялан эштәрендә бил бөккән, өйөр – өйөр һыйыр һәм һарыҡ көтөүҙәрен аҫыраған бик тырыш кешеләр йәшәгән, ти Улар бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисермәгәндәр...

Бер ваҡыт ошо ауыл кешеһе баҡсаһында тәпке менән түтәлдәрҙе тәпкеләп йөрөгәндә, уның яурынына Ҡамҡа килеп ҡуна. Ул уны күреү менән ҡыуанып

ҡыскырып ебәрә: “Күрҙегеҙме? Миңә Ҡамҡа үҙе килеп ултырҙы! Хәҙер мин иң уңышлы кеше буласаҡмын! Миңә бер нәмәгә лә борсолорға кәрәкмәй! Ул миңә бәхет алып килде!”

Уның һөйләнгәнен Ҡамҡа иҫе китеп тыңлай. Был хәтлем һоҡланыу һәм шатланыуҙың сәбәбен аңламай: “Нимә тураһында һөйләй ул? Әгәр үҙең тырышлыҡ күрһәтмәһәң, хеҙмәт көсөңдө һалмаһаң, эш уңышлы була аламы икән?”

Теге кеше, шул мәлдән алып, бар булған эштәрен ташлай. Ҡый үләндәрен утауҙан туҡтай. Емеш ағастарының өлгөргән емештәрен дә йыймай, улар ергә төшөп серейҙәр. Көтөүҙәрен дә көтмәй башлай, иркенгә сығарып ебәрә. Уларын бүреләр тамаҡлай бөтөрә. Кәрәкмәгән ғөрөф – ғәҙәткә ышанып, барыһы ла яйға һалыныр, тигән ҡарарға килә. Әммә ул бар булған мөлкәтен юғалта.

Бер ваҡыт был бөжәк тағы ҡулына килеп ҡуна. Уны күреп ҡалған кеше ныҡ асыулана һәм нәфрәтләнеп әрләргә тотона: “Тағы миңә килеп ҡундыңмы? Яуыз уйлы бөжәк! Мине һәләк итергә теләйһеңме? Һинең арҡаңда былай ҙа барыһынан да яҙҙым!”

Арҡаһына биштәр аҫып үтеп барған сал сәсле ҡарт юлсы уның был һүҙҙәрен ишетеп ҡала. Таяғына таянып, уға ҡарап тора ла былай тип өндәшә: “Эй, кеше! Һиңә бер кәңәш бирәйемме? Кешеләрҙең уйлап сығарғандарына ышанып, үҙе генә башҡара торған эштәрен ташлағандар менән ни булыры билдәле инде! Был - үҙҙәрен йыуатыр өсөн уйлап сығарылған бер мәрәкә һәм алдашыу ғына! Бер ғәйебе булмаған бөжәкте үҙеңдең бәхетһеҙлектәреңдә ғәйепләү дөрөҫмө икән? Ялҡаулығыңды ташла, яңынан эштәреңә тотон! Тырышып эшлә! Аллаһы Тәғәлә һиңә уңыштарын да бирер!”

Кеше үҙенең мәғәнәһеҙ ҡыланышын аңлай. “Беҙҙең бәхетһеҙлектәр ялғанды дөрөҫлөк менән бутауҙан килеп сыға түгелме һуң?” – тигән фекергә килә.Ҡарт юлсының аҡыллы кәңәштәренә рәхмәт әйтеп, Ҡамҡаны осороп ебәрә!



ФИЛ ҺӘМ ЖИРАФ

Эҫе Африка иленең тропик далаларында айырылмаҫ ике дуҫ, фил менән жираф, йәшәгән. Таң һарыһынан алып ҡараңғы төшкәнсе, улар киң көтөүлектәрҙә утлағандар. Оҙаҡ яуған ямғырҙар сезоны үткәс, далала тормош урғып ҡайнай башлай: ер күпереп торған һутлы үләнгә күмелә, йәшел төҫкә ингән ағас һәм ҡыуаҡлыҡтар шаулайҙар. Бер – береһенә иңгә иң терәлешеп, тыныс ҡына антилопа, ҡырағай аттар, буйволдар утлайҙар. Сәрүәр (акация) ағасының киң күләгәһендә, йәшелгә күмелгән сикһеҙ киңлекте күҙ уңынан ысҡындырмай ғына күҙәтеп, ғорур арыҫландар ял итә.Ҡуйы әрәмәлектә гепард, һыртлан,ҡаплан, сүл бүреһе кеүек бәләкәйерәк йыртҡыстар йәшеренгән. Ә инде мөлдөрәмә тулы күлдәрҙең йылы һыуында һәм ситендәге шифалы баткағында бегемот менән носорог наҙлана

Ошолай итеп аҙналар һәм айҙар үтә. Бына бер заман был далаға ҡоролоҡ килә. Ҡасандыр һутка тулып ултырған тәмле үләндәр һулыйҙар, ағас һәм ҡыуаҡтар япраҡтарын ҡоя. Үлән ашап ҡына туҡланыусы ҡыр



хауандары мул үләнле ерҙәр эҙләп, был тирәнән китә башлайҙар. Улар артынан күршеләре булған йыртҡыс хайуандар ҙа эйәрә. Дала бөтөнләй бушап ҡала. Тик айырылмаҫ ике дуҫ – фил менән жираф ҡына тороп ҡала. Улар, элеккесә икәүләп, ҡояш ҡыҙҙырған сикһеҙ даланы иртәнән алып кискә тиклем гиҙәләр. Был икәүгә көндән – көн ашарға табыу ҡыйынлаша.

Бер ваҡыт, тамаҡ туйҙырыу өсөн аҙыҡ эҙләп, фил менән жираф бик оҙаҡ даланы ҡыҙыралар. Әммә ҡояшта янып ярылған был ерҙә бер бөртөк тә үлән тапмайҙар.Ҡапыл, ҙур булып үҫкән баобаб ағасының күләгәһендә бәләкәй генә йәшел ҡыуаҡлыҡты шәйләйҙәр. “Был минеке! Мин беренсе күрҙем!” – тип ҡысҡырышып ҡыуаҡҡа ташланалар. Уҙышып йүгергәндә, ҡабырғалары менән бәрелеп, бер – береһен аяҡтан йығалар. Жираф эләгеп ҡолағанда тояғы менән филдең ҡолағына баҫа. Ә фил йығылғанда, жирафтың оҙон муйынын саҡ һындырмай.

- Ибәтәйһеҙ, шөкәтһеҙ фил!

- Һонтор, һынһыҙ жираф! – тип бер – береһен әрләргә һәм кәмһетергә тотоналар.

Ҡасандыр бер – береһенән бер нәмә лә йәлләмәгәндәрен, бәләкәй генә аҙыҡты ла бүлешкән көндәрен онотоп, ике дуҫ талашып, үпкәләшеп айырышалар. Ошо көндән алып уларҙың далала бергә йөрөгәндәре күренмәй...

Бына Африкаға йәнә яҙ килә!! Уның менән бергә ямғырҙар сезоны

ла башлана. Тәбиғәт яңынан терелә. Жираф менән фил үпкәләшкәндәре өсөн бик үкенәләр. Әммә икеһе лә беренсе булып ғәфү үтенергә оялалар.

Жираф, бейек ағастарҙың ботаҡтарынан япраҡтарҙы йолҡа – йолҡа, дуҫы менән бергә утлаған матур саҡтарҙы иҫләп һағышлана: "Эх, минең оҙон телем! Мин бит иң яҡын дуҫымды рәнйеттем! Нимәләр генә әйтеп бөтмәнем уға! Нимәгә бит әле!?! Бер шәлкем япраҡ өсөн күпме насар һүҙҙәр ишетте ул минән! Хатта ҙур урман хәтле япраҡтарға эйә булһам да, дуҫым эргәмдә булмағас, уның да кәрәге булмаҫ ине миңә!"

Фил, уны "ҡаты тиреле", тип әйтһәләр ҙә, ысынында, дуҫынан кәм ҡайғырмай. Ул дуҫы менән бик ярашҡыһы килә. Көн артынан көндәр уҙа. Дуҫтар бер – береһен нык һағыналар, шул хәтлем юҡһыналар.

Бына бер көндө айырылыуға түҙә алмаған жираф, беренсе булып, филдән ғәфү үтенергә ҡарар итә лә, уны эҙләп юлға сыға. Ошо мәлдә фил дә жираф дуҫын эҙләп китә. Бушҡа ғына әйтмәйҙәр бит, йөрәктәре яҡын булғандар бер – береһен һиҙә, тип.

Тиҙҙән улар осрашалар. Алыҫтан уҡ бер – береһен күрһәләр ҙә, яҡынлашырға ҡыймайыраҡ торалар, сөнки икеһенә лә нык оят була. Жираф беренсе булып ҡыскыра:

- Фил туған! Дуҫым минең! Зинһар өсөн мине кисер! Мин дөрөҫ эшләмәнем! Миңә... һинһеҙ нык ҡыйын!

- Жираф дуҫ! Мин ғәйепле барыһына ла! Һин ғәфү ит инде мине! – тип яуаплай фил.

Ике дуç, ниһәйәт, ярашалар, башҡаса талашып йөрөмәйҙәр... Әгәр һүҙгә килешһәләр, бөтөнләй аҙға ғына - биш минутҡа ғына. Улар ысын дуç булып, бер – береһен ҡайғыртып, шатлыҡ – ҡыуаныстарҙа ла, ауырлыҡтар һәм бәлә килгәндә лә бергә ысын дуç булып ҡалалар.

СОЛТАН ХӘЙЛӘҺЕ

Ҙуууур бер урманда бик көҙрәтле Арыҫлан тигән солтан хакимлыҡ иткән, ти. Оҙаҡ йылдар уның биләмәһендә тыныслыҡ һәм тәртип булған. Ә Арыҫлан үҙе ҡайғы – хәсрәтһеҙ, тыныс ҡына ғүмер иткән.Уның көндәре бер – береһенән бер нисек тә айырылмаған, бер төрлө үткән.

Бер мәлде Арыҫлан солтан урман әһелдәренең кеме уға ихлас һәм тоғро булғанын, буйһоноусанлыҡ күрһәткәнен, ә кеме - ике йөҙлөлөк һәм яһалмалыҡ битлеге аҫтында йөрөгәнен белгеһе килә.

Бының өсөн солтан баш вәзирен саҡырып ала һәм үҙенең ошо ниәтен һөйләп бирә. “Бының өсөн, ти солтан, һин бөтә урманға сапҡынсылар ебәр. Улар минең үлемемде хәбәр итһендәр. Ә мин инде ипләп

кенә дәүләтемдә йәшәгәндәрҙең был хәбәргә мөнәсәбәтен күҙәтермен!" – тигән.

Солтандың бойороғо үтәлә, һәм урманда йәшәүселәрҙең барыһы ла уның бағыйлығҡа күскәнен ишетә. Күптәре был хәбәргә башта ышанмайҙар. Әммә баш вәзирҙең үҙе иғлан итеүе, уларҙың икеләнеүҙәрен юҡҡа сығара. Барыһы ла ошо яңылыҡты һәр яҡлап тикшереп, фекер алышырға тотоналар.

Эңер төшкәс, Арыҫлан солтан үгеҙ тиреһен ябынып, йәшерен генә үҙенең биләмәләрен ҡарап сығырға юллана.

Башҡаларҙың иғтибарын үҙенә йәлеп итмәҫ өсөн ҡуйы ағастар аша үтергә тырыша. Ә яҫтыҡ кеүек йомшаҡ тәпәйҙәре уның хәрәкәттәрен бөтөнләй ишетелмәҫ итә.

Төлкөнөң өңөнә яҡынлашҡанда уның: "Ниһәйәт, үлгән икән!!! Хәҙер миңә солтан ҡурҡыныс түгел! Ул мине язаға тарттыра алмай! Бер ҡат-

лыларҙы ҡурҡып та тормай алдарға ла, уларға ҡаршы төрлө хәйләләр ҡороғ ла була!” – тигән шатлыҡлы тауыштарын ишетә.

Ә аҡланда бүре менән шакал шыбырлаша: “Арыҫлан үле! Иркенлек килде! Беҙгә хәҙер уны, хөрмәт итәм, тип ҡыланып ултырмаҫҡа ла һәм унан ҡурҡмаҫҡа ла була! Беҙ – бүреләр, бер ҡасан да бесәйҙәр етәкселегенә буйһонмайбыҙ, уларҙың хөкөмөн һанға һуҡмайбыҙ!”

Элек уға түбәнселек менән баш эйеп, хөрмәт күрһәткән йыртҡыс – йәнлектәр, хәҙер уның вафатын ишетеп ныҡ ҡыуаналар һәм тантана итәләр ине... Ауыр уйҙарға сумып Арыҫлан юлын дауам итә. Ошо мәлдә уның ҡолағына шым ғына һөйләшеү ишетелә: “Шым, айыу ағай! Теленде тешләнкерәп тор! Солтан үлмәне... Был уның кемдең кем икәнен белергә, кем уның тураһында насар фекерҙә икәнен асыҡлар өсөн ҡорған хәйләһе генә...”.

Әңгәмәләшкәндәрҙең кемлеген күрер өсөн, арыҫлан күҙенә ҡамасаулаған ағас ботактарын күтәреп ҡарай һәм үҙенең сере менән бүлешкән баш вәзир юлбарыҫты күреп, хайран ҡала... Ул айыуҙың ҡолағына эйелеп алған да, солтандың серен аса ине... Уның иң ышаныслы ярҙамсыһы – иң хәйләкәре һәм уның алдында ҡыланыусы ғына булған икәәән...

“Әгәр минең баш вәзирем шулай булғас, ҡалған ябай урман әһелдәре нисек булырға тейеш һуң?..” тип уйлана ул... Йөрәге әрнеүле һағышҡа күмелә...

Ҡапыл ҡыуаҡлыҡтар араһынан һулҡылдап сеңләп илау һәм һамаҡлау ишетелә. Ул иғтибар менән тыңлай башлай. Был – күҙ йәштәрен үгәй әсә үләненең япрағы менән һөртә – һөртә илаған ҡуян балаһы ине: “Эх, минең солтаным! Ни эшләп беҙҙе ташлап киттең инде? Һин булмағас, урман да һынһыҙ бушлыҡҡа сумды! Йырҡыс – йәнлектәр ҙә ҡарауһыҙ булып ҡалдылар, унда – бында бераҙәкләнеп йөрөй башланылар. Тәртип тә бөттө... тыныслыҡ та юҡ!... Көслөләр көсһеҙҙәрҙе рәнйетергә лә тотондолар...”

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Арыҫлан ҡуян эргәһенә сығып, янына ултыра ла уға ҡушылып илай башлай: “Ииии... минең ысын дуҫым! Мин теремен! Ҡурҡма! Һинең кеүек тоғро дуҫтарҙы мин ташламаясаҡмын!..”

Солтан һарайына улар икәүләп ҡайталар. Арыҫланды һатканы һәм ышанысын юғалтканы өсөн баш вәзир юлбарыҫ һарайҙан ҡыуыла. Уның

урынына, баш вәзир итеп, ҡуян тәғәйенләнә. Солтан "мин һинең дуҫың", тигән һәр кем, ысынында, дуҫ булмауын аңлай. Ысын, тоғро дуҫтар – һине бер нәмәгә ҡарамай яраталар. Улар бер ҡасан да хыянат итмәйҙәр, алмашҡа һинән нимәлер өмөт тә итмәйҙәр.

БҮРЕ һӘМ ӘРӘМТАМАҠ ТӨЛКӨ

Урманда ике дуҫ йәшәгән - һоро бүре һәм ҡыҙғылт ҡуңыр төҫтәге ерән төлкө. Икеһе ике төрлө холоҡло булһа ла, айырылмаҫ дуҫтар булған, ти улар. Бүре – көслө, ҡурҡыу белмәҫ ҡыйыу һунарсы булып танылған. Бер үҙе ҡоралай, ҡыр сыҡаһына һунар итә алған. Ҡайһы саҡта яҡын – тирәләге ауылдарҙан кәзә, йә һарыҡты ла һөйрәп килтергән. Ә төлкө инде сыҡан һәм ҡуяндарҙы ғына тота алған. Һуйыр һәм ағуналарҙың ояларын туҙҙырған, йәки ауылдарға барып әтәс- тауыҡтарҙы кетәктән урлаған.

Бүре – хәйләһеҙ, бер ҡатлы һәм йомарт булған. Һунарҙан тапҡанынан үҙенә етәрлек кенә өлөштө алып ҡала ла, ҡалғанын бүре туғанда-

рына һәм төлкө дуҫына биргән. Төлкө был дуҫлыҡты бик ҡәҙерләгән һәм һаҡларға тырышҡан. Ул бүрегә үҙенең эскерһеҙлеген һәм тоғро булыуын ышандырыр өсөн, тота алһа, ҡайһы саҡта сыҫкан һәм ҡуяндары менән бүлешкән.

Төлкө – төлкө түгел инде, бар ҡыланыштары ла ғәҙел булһа! Уның бүлешеүендә лә хәйлә бар ине: "Мин уны сыҫкан, ҡуян менән һыйлаһам, ул тоҡкан ҡоралайы менән бүлешәсәк! Әгәр мин тоҡкан ағуна менән уртаҡлашһам, ул һарыҡ боғаҙлап килтерәсәк... Был дуҫлыҡты миңә һаҡлар кәрәк! Бүре – минең өсөн бик уңайлы һәм ҡиммәтле дуҫ,"- тип фекерләгән мәкерле төлкө. Хәйләкәр төлкө бүрене бәләкәй генә сыҫкан менән һыйлағанда ла бүре ысын күңелдән шатланған: "Һеңлекәш! Һин һәр саҡ мине ҡайғыртаһың! Нимәң бар – барыһын да миңә бирергә әҙерһең! Шундай дуҫың булыуы ниндәй бәхет!"

Хәйләкәр, мут ерәнкәй, ысын күңелдән бирелгәнлеген, тоғролоғон күҙҙәрендә сағылдырырға тырышып, бүрегә мөлдөрәп ҡарай, ә үҙе эстән генә мыҫҡыл итеп көлә: "Һин һунар итәрһең, мин ашармын. Һин ҡоралайҙар артынан хәлдән тайғансы сабырһың, ә мин уларҙы тотоп алып килеүеңде тыныс ҡына көтөрмөн"... Ошолай итеп, айҙар артынан айҙар үтә. Яҙҙы йәй алмаштыра, көҙ артынан ҡыш килә. Бүре ашарға таба, ә

хәйләкәр төлкө көндәр буйы йомшаҡ яҫтыҡ – түшәктәрҙә аунап ял итә, үҙенең матур тунын таҙарта, үҙе кеүек эшһеҙлектән нимә эшләргә белмәгән ерән әхирәттәре менән сәғәттәр буйы урман яңылыҡарын һәр яҡлап тикшереп, гәпләшәләр.

Арҡанды күпме ишһәң дә осо була, тигәндәй... Ҡыштың һыуыҡ бер көнөндә бүре, ғәҙәттгесә, һунарға сыға. Ул болан эҙҙәренә юлыға. Тәрән көрттө йырып,

хәлдән тайғансы, уларҙы оҙаҡ ҡына эҙәрлекләй. Нихәйәт, бүре боландарҙы табып ала. Улар уны тиҙ генә һиҙеп ҡалалар. Көтөүҙең иң көслө, иң ҙур боланы - көтөүҙең башлығы, башҡаларҙы ҡурсалап

һаҡҡа баҫа. Үҫенең тарбаҡланып торған ҙур, мөһабәт мөгөҙҙәрен бүрегә тоҫҡап һөжүмгә күсә. Алыш оҙаҡ бармай. Болан мөгөҙө менән бүрене һөҙә. Ә бүре, уның муйынына йәбешер өсөн, боланға һикерә, ләкин болан да юғалып ҡалмай, көслө тояҡтары менән уның башына тибә. Бүренең күҙ алдары ҡараңғыланып китә һәм ул иҫһеҙ йығыла. Иҫенә килгәндә, эңер төшә башлаған була. Бүре ятҡан тирә - йүндәге ҡар, уның ауыр яраларынан һарҡҡан ҡандан, ҡып – ҡыҙылға әйләнә. Бөтә тәне һыҙлай ине бүренең. Торорға маташып ҡараһа ла, тора алмай интегә, үҙенең өңөнә саҡ шыуышып барып ауа ул.

Төлкө бүрене көнө буйы көтөп ала алмағас, уның өңөнә таба юлланa. “Эй! Бүре дуҫ! Мин бөгөн урманды көнө буйы ҡыҙырып сыҡтым. Исмаһам, бер ҡуян да, хатта сыҫкан да тота алманым! Аслыҡтан һәм ныҡ арыуымдан саҡ аяҡтарымда баҫып торам! Ә һин бөгөн моғайын, һунарға сыҡҡанһыңдыр? Үҙең туҡ булғас, минең турала оноттоң инде! Дуҫтар улай ҡыланмайҙар! Мин һәр саҡ һинең менән табышымды бүлешә инем!..”- тип йәлләтеп һөйләнә бүренең өңөнә яҡынлашҡас. Өңгә яҡын кигәс, ул бүренең ҡаты яраланғанын, ауыр итеп тын ала-ала, ут кеүек янған тәнен һыуытыр өсөн ҡар ашағанын күрә. Эйе, хәҙер ул оҙаҡ ҡына һунарға сыға алмаясаҡ! Уның үҙенә хәстәрлек, тәрбиә кәрәк... Ике йөҙлө

төлкө уға ярҙам итеү тураһында уйламай ҙа хатта. Бынан һуң бүренән файҙа булмаясағын аңлай. Һәм шунда ук, үҙенә башҡа көслө дуҫ эләргә сығып та йүгерә.

Бүре ауыр яраларын ялай – ялай үкенеп уйлай: “Нисек итеп мин ошо хәйләкәр, мут, төлкөнөң алдаҡсы һүҙҙәренә ышандым икән?!” Әгәр был хәл булмаһа,бүре оҙаҡ ҡына төлкөнөң ысын йөҙөн һәм дөрөҫлөктө белмәҫ ине. Юҡҡа әйтмәйҙәр бит: “Дуҫтар ауыр сақта, бәлә килгәндә беленә!-“ тип.



ТӘРТИПҺЕҘ ҠАПЛАН (ЛЕОПАРД)

Йәшәгән, ти бер ҡаплан. Ҡырағай тәбиғәттә йәшәгән ҙур бесәйҙе шулай атайҙар. Ҡаплан – әйтеп аңлатҡыһыҙ матур, уҡтай атылыусан һәм һығылмалы бер йәнлек ул. Уның шыма, алтын һары төҫтәге тиреһе ҡара таптар менән биҙәлгән. Ҡойроғо оҙон, тәпәйҙәре көслө. Капландың мөһабәт аҙымдары еңел һәм тауышһыҙ. Ул бар яҡтан да килешкән, матур йәнлек, тик бала саҡта ата – әсәһе яҡшы ғәҙәттәр тәрбиәләмәгәнгә күрә холҡо ғына насар икән.

Уның бер яман ғәҙәте була, тоткан табышын тешләп бөтә урман аша һөйрәтеп алып йөрөй. Аҙаҡ үҙенең уңышлы һунарына мактанып, аҡлан уртаһына туҡтала. Бар урман әһелдәре алдында тәмләп тороп табын ҡорорға ярата.Ул үҙенең табышын берәү менән дә бүлешмәй. Аслыҡтан интеккән йәнлектәр ситтән генә көнләшеп ҡарап торалар, әммә яҡын

барырға ҡыймайҙар, сөнки ҡаплан берәүҙе лә табышына яҡын ебәрмәҫен, ҡайһы сақта ҙур ғауға һәм һуғыш сығарасағын да улар яҡшы белә.

Бер мәлде ҡаплан, ғәҙәттәгесә, аҡлан уртаһына болан түшкәһен һөйрәп алып килә лә, ҙур киҫәктәргә өҙгөләп, ашай башлай. Йән – яғын ҙур ҡәнәғәтләнеү менән күҙәтә – күҙәтә ләззәтләнеп тәғәмен дауам итә. Үҙенең көсөнә, таҡыллығына, һунарҙан ҙур табыш менән ҡайтыуына һоҡланып, ситтән генә күҙәткән йәнлектәргә ҡарап маһая. Ҡырҙан ғына ҡарап торған сүл бүреһе, берәй киҫәк ит эләктереп булмаҫмы, тигән уй

менән ҡапланға яҡынлаша. Белеүебеҙсә, бәләкәй, сирле һәм көсһеҙ сүл бүреләре, йыш ҡына ҙур табышлы йырткыстарҙан ҡалған ҡалдыҡтар менән туҡланыр өсөн улар артынан йөрөй. Ҡаплан уның был ниәтен һиҙеп ҡала:

- Эй! Сүл бүреһе! Кит янымдан! Минән алыҫ тор! Был минең табышым! Ҡайҙа теләйем, шунда ашайым, бер кем дә уға тәпәйен һуҙа алмаҫ!

- Иии, ҡаплан туған! Бөтә ғәм алдында табын ҡороргa ярамай, был әҙәпһеҙлек бит! Ҡара әле тирә – яғыңды! Күпме ас, хәлһеҙ мохтаждар һине күҙәтә! Берәй көн һин дә улар хәлендә ҡалыуың бар. Кемдер табышлы булыр, ә һиңә ошо мәлдә уңыш йылмаймаҫ! Ул сакта һинең менән дә бүлешеүсе булмаҫ, һин дә ас ҡалырһың! Ана шул мәлдә минең әйткәндәремде иҫеңә төшөрөрһөң әле,- тигән дә сүл бүреһе, урман эсенә инеп юғалған. Ҡаплан уның артынан мыҫҡыллы көлөп ҡалған:

- Тыңлағыҙ әле, бахыр сүл бүреһе миңә нимә әйткәнен! “Берәй көн мин дә улар хәлендә ҡалыуым бар,” – имеш!

...Шулай итеп, бер нәмә лә ыңғайға үҙгәрмәйенсә, ваҡыт һәүетемсә үтә бирә...

Бер көндө, ҡаплан тау һыртына ышыҡланып, табышын һағалаған

сақта, һыулауға таба киткән һүкмақта тау кәзәһе күренә. Уның яҡыныраҡ килеүен ҡаплан көтөп ала ла, уҡтай атылып тау кәзәһенә һикерә. Кәзә лә аптырап ҡалмай, етеҙ генә ситкә һикереп өлгәрә лә тауҙың ташлы һырты буйлап өҫкә омтола. Ҡаплан уны ҡыуа төшә. Тау кәзәһе, дүрт тояҡтары менән үҙен этәреп, ҡаяның иң юғары осонда булған ҙур ғына тарлауыҡтан аша һикерә. Ҡаплан да һунар ҡомары менән кәзә артына һикерә. Ҡапыл упҡын ситендәге таш уның аяҡтары аҫтында ҡыйшайып, айырылып китә, ул таш менән бергә ысҡынып, төпһөҙ тарлауыҡ упҡынына тәгәрәй. Аҫҡа оҫкан сақта, ҡаяға йәбешеп үҫкән ҡыуаҡлыҡтарға эләгеп, үҙенең таштар өҫтөнә ҡолап төшөүен еңеләйтә. Каплан тарлауыҡтың иң төбөнә тәгәрәй. Ул тере ҡалһа ла бик тәрән яралар ала һәм зәғифләнә. Әллә нисә көндәр кеше көнөнә ҡалып, ярҙамға мохтаж ята. Хатта мороно төбөндә тегеләй-былай йүгерешкән кеҫәрткеләрҙе лә тоторға көсө етмәй. Ҡаплан ныҡ ябыға, хәле бөтөнләй ҡалмай. Уның матур шыма, алтын һары төҫтәге һоҡланғыс тиреһе тоноҡлана. Төҫһөҙләнеп ҡойола башлаған тиреһе аша бөтә ҡабырғалары беленә.

Бер көндө тарлауыҡта, тоҡкан илекте һөйрәп килгән юлбарыҫ күренә. Ул үҙ өлөшөн ашай ҙа ҡалғанын яралы ҡапланға ҡалдыра. Ошо мәлдә сүл бүреһе әйткән һүҙҙәр иҫенә төшә: “Берәй көн һин дә улар хәлендә

ҡалыуың бар!..” Үҙенең әшәке ҡылығы өсөн нык оялып, үкенеп илап ебәрә. Каплан яйлап йүнәлә. Хәҙер ул үҙенең табышынан башҡаларға ла өлөш сығарып өйрәнә. Әгәр инде табышы бүлешерлек булмаһа, исмаһам, маһайып башҡаларға күрһәтеп ашамай.

ШАЯРЫУ

Урман уянып та өлгөрмәгән йәйге бер иртә... Ағастарҙың тығыҙ япраҡтарында ҡалған ысыҡ тамсылары ла кибеп бөтмәгән... Йөнтәс тиреле һәм ҡанатлы-ҡауырһынлы урман әһелдәре үҙҙәренең һуңғы төштәрен күрәләр ине... Ошо таң һарыһы беленә башлағанда, кемдер урман хужаһы Арыҫландың ҡапҡаһын ҡаты итеп шаҡырға керешә. Хужа был тиклем иртә менән борсоғандарына ҡәнәғәтһеҙләнеп ҡапҡаһын аса. Ул, алдында йүгереп тыны бөткән, ҡурҡышынан йән – яғына ҡаранған, үҙенең баш министры Юлбарыҫты күрә.

- Урманда берәй хәл булдымы? Был тиклем дә иртә менән нимә ҡарап йөрөйһөң? – тип һорай Арыҫлан.

- Нәфрәтләнмә инде, батшам... Төнө буйы йоҡлап булманы... Ҡурҡышынан, балаларҙың илауынан, алдағы билдәһеҙлектән урман

халҡы бөтөнләй керпек ҡаҡманы, - тип яуаплай ҡалтыранған тауышы менән Юлбарыс.

- Нимә булды? Һуҙма! Һөйлә тиҙерәк! – тип бойора Арыҫлан.

- Урманда күҙгә күренмәгән ниндәйҙер йән эйәһе пәйҙә булған... Төндәрен ҡурҡыныс тауыш менән үкерә, барыһын да ҡурҡыта... Урман халҡы өңдәренән танауҙарын да сығарырға ҡурҡалар... Улар һинең был ҡот осҡос имәнес нәмәне табыуыңды һәм тынысландырыуыңды һорайҙар...

- Бар, барыһына ла иғлан ит! Мин уны табасаҡмын, йыуашландырасаҡмын һәм тәртип урынлаштырасаҡмын!

Юлбарыс, уның бойороғон урман халҡына йәһәтерәк еткерергә, тип ашығып китеп бара. Арыҫлан тәрән уйға ҡала: "Барыһын да ҡурҡыуға һалған был йән эйәһен нисек табырға?" Юлбарыҫты ебәргәненә үкенен тә ҡуя, сөнки уға юл күрһәтеүсе кәрәк ине. Ул бит биләмәһен һирәк ҡарап сыға, шуға ла урманды насар белә ине.

Эргәләге ҡарағай башында ултырған ҡарт Ҡарға был мажараны иғтибар менән күҙәтә. Батшаның урманды ҡарап сығыу теләген белгәс, ағас башынан уға ҡыскыра:

- О минең батшам! Һинең нимә эҙләгәненде мин беләм! Миңә өҫтән бар урман яҡшы күренә! Ҡаррр! Әйҙә, минең арттан, һиңә юлды күрһәтеп барырмын!

Урманға ҡайҙандыр килгән, барыһын да үҙенең ҡурҡыныс тауышы менән ҡурҡытҡан билдәһеҙ йән эйәһен эҙләргә икәүләп сығып китәләр. Ҡарға ҡайын саукалығынан йүкә ағаслығына, имәнлектән ҡарағайлыҡҡа осоп үтә, ҡамыш баҫҡан йырындар өҫтөндә өйөрөлөп – өйөрөлөп йөрөй, кеше үткеһеҙ сәтләүеклек һәм ҡурай еләктәре ҡыуаҡтары ла ситтә тороп

ҡалмай. Ләкин бер ерҙә лә билдәһеҙ йән эйәһен осратмайҙар. Батша янына килеп, йәнлектәр үҙҙәренең ҡайғыларын һөйләйҙәр. Бына дауыл мәлендә ҡартайған имән ҡолап, йылғаны быуған икән, хәҙер аҫҡы урманда йәшәүселәр һыуһыҙ ҡалғандар. Бал ҡорттары кәрәҙҙәрен туҙҙырған айыуға зарланалар. Төлкөнөң алдауынан,

һайыҫкандың ғәйбәт ташыуынан урманда йыш ҡына ирешеүҙәр, хатта һуғышыуҙар ҙа була икән. Батша иҫе китеп быларҙың барыһын да тыңлап, шуны аңлаған – халҡының нисек йәшәүен ул бөтөнләй белмәй икән! Ләкин шуныһы асыҡлана - берәү ҙә ҡот оҫкос билдәһеҙ йән эйәһен күрмәгән! Ҡараңғы эңергә тиклем Арыҫлан шишмәләр аша һикереп, тиреһен һыҙырған ҡуйы сәнскеле ҡыуаҡлыҡтарҙы йырып, бейек ҡалҡыулыҡтарға менеп, тәрән йырындарҙы үтеп Ҡарға артынан сапҡан да сапҡан...

Бөтөнләйгә хәле бөтөп, арып ағас төбөнә килеп ята. “Көнө буйы әллә нимәне эҙләнек? Ҡайҙа ул?” – тип Ҡарғаға ҡыҫҡыра. Уға яуап биреүсе булмай, ул күптән инде ҡайҙалыр осоп киткән була. Шунда ғына Арыҫлан, уны һарайынан юрамал алдап сығарып алғандарын, биләмәләре буйлап йөрөтөп, халҡының мохтажлыҡтарын, нисек йәшәүен күрһәткәндәрен аңлап ҡала. Ошо көндән алып, Арыҫлан урман әһелдәренә бик иғтибарлы була, ҙур яуаплылыҡ менән урман тормошон күҙәтә һәм етәкселек итә. Артабан ул ишеткән хәбәрҙе тикшермәйенсә, уға ышанмаған.

АХМАҠ ТАУЫҠ

Бер аҙбарҙың ҡыйығы аҫтындағы кетәктә күп кенә тауыҡтар ғүмер иткән. Тығыҙ булһа ла, улар яҡшы йәшәгән. Хужалары уларҙы иң яҡшы ем менән тоҡландырған. Ә тауыҡтар тырышып көн дә йомортҡа һалғандар. Ике яҡ та бик ҡәнәғәт булғандар. Ә инде бәләкәй кетәктең тарыраҡ булыуы ла бер яҡтан яҡшы булған. Сөнки һыуыҡ көндәрҙә тауыҡтар бер – береһенә һыйынышып ултырып йылынғандар. Әммә улар араһындағы өлтөклө тауыҡҡа ғына бындай тормош оҡшамаған. Ул үҙен бар тауыҡтар араһында иң яҡшыһы, тип уйлаған һәм алйот тауыҡтар булмаған киң кетәктә бер үҙе генә айырым йәшәргә хыялланған. Һәр саҡ күп булған емде, бер кем менән дә уртаҡлашырға теләмәгән.

Тауыктың башында бер план тыуа. Бына ул хужаһының ҡала баҙарына сығып китеүен көтөп ала һәм ҡойма ярығы аша йылт итеп сыға ла, урманға табан елдерә. Урманда төлкөнөң өңөн эҙләп таба ла, уның ҡайтканын көтөп ултыра. Өңө алдында ултырған тауыҡты күреп төлкө хайран ҡала:

- Һин аҡылдан яҙғанһыңмы, әллә йәшәүҙән ялҡтыңмы? Мин хәҙер һине ашаыйм бит!

- Минең һиңә бынан да яҡшы тәҡдимем бар, - тип яуаплай тауыҡ.

Ул нисек итеп әхирәт тауыҡтарынан ҡотолорға теләгәнен төлкөгә һөйләп бирә һәм уға кетәккә инергә ярҙам итергә әҙерлеген белдерә. Тауыҡ ҡорған план буйынса, төндәрен төлкө тауыҡтарҙы берәмләп урлаясаҡ, ә өлтөклө тауыҡҡа теймәйәсәк. Һәр кем үҙ файҙаһын аласаҡ – өлтөклө тауыҡ йырлап – гөрләп бер үҙе киң кетәктә йәшәйәсәк, ә төлкө тук буласаҡ!.. Ошо мәл төлкөнөң өңөнән ике ерән морон күренә. Үҫмер төлкө балаларына был икәүҙең әңгәмәһен тыңлау бик тә ҡыҙыҡ ине! Әсәләре уларға асыуланып ыҫылдағас, тегеләр шундуҡ өңдәренә инеп юҡ була... Төлкө әҙерәк уйланып тора ла, тауыҡтың тәҡдименә ризалыҡ бирә.

Эттәр өрөүҙән туктап, бөтә яҡ һил булып, ауыл тәрән йоҡоға талған төндә төлкө шым ғына кетәккә яҡынлай. Уның килгәнен көтөп ултырған өлтөклө тауыҡ ипләп кенә кетәктән һикереп төшә лә, бәләкәй тәҙрә эргәһенә осоп менеп, тәпәйе менән келәне шылдыра. Тәҙрә асылыу менән төлкө эскә инә.

Оҫта һәм хәйләкәр һунарсы, төнәктән уянып өлгөргмәгән йоҡоло ике

тауыҡты эләктереп ала ла муйындарына йәбешә. Табышын тәҙрә аша ташлай ҙа арттарынан үҙе һикерә. Ҡапҡа артында уҡ башланған иген баҫыуының ситендә уны ике балаһы көтә ине. Улар бер тауыҡты эләктерә һалалалар ҙа урманға йүгерәләр. Икенсе тауыҡты тешләгән әсәләре лә улар артынан төшә. Аҡ сәскәләргә күмелгән бер ҡалҡыулыҡта туҡтап, тәмле табын ҡоралар...

Икенсе төндә лә шул уҡ хәл ҡабатлана... Һәр төн һайын төлкө яйлап тауыҡтарҙы ташый...

Хужа тауыҡтарының юғалғанын һиҙеп ҡала. Тик ул бурҙың нисек итеп аҙбарға ингәнен бер нисек тә аңлай алмай. Йоҙаҡҡа бикләнгән ишек онталмаған! Бер нисә төн рәттән мылтыҡ тотоп бурҙы һаҡалап та ҡарай. Төлкө уны әллә ҡайҙарҙан һиҙеп ала ла, йоҡоһо менән көрәшкән хужаның арып, өшөп, йәһәтерәк йылы юрғаны аҫтына-матур төштәрен күрергә, тип, ашығып инеп киткәнен сабыр ғына көтә. Шунан йәшеренгән еренән сыға һәм тотолмайынса, көндәлек эшенә әүерелгән урлыҡты, төн һайын дауам итә.

Төлкө, шулай итеп, кетәктәге тауыҡтарҙы ла ташып бөтә яҙа. Бына төн ауа, ул тағы килә. Өлтөклө тауыҡ уға тәҙрәне аса. Төлкө һуңғы тауыҡты тотоп муйынын боғаҙлай ҙа, ҡапыл бер һикереүҙә өлтөклө тауыҡ алды-

на килеп баса. Ҡанға буялған һәм тауыҡ йөндәре йәбешкән моронон яҡынайтып, яғымлы һәм йомшаҡ ҡына итеп мырылдап былай, ти:

- Ә хәҙер сират һиңә етте, аңра ҡош!

Тауыҡ ҡыткылдап ғауға күтәрә:

- Һин миңә теймәҫкә һүҙ бирҙең бит! Был бит беҙҙең килешеү ине лә һаң!!!

Шау – шыуҙы ишетеп, мылтығын алға тоҫҡап, өй хужаһы килеп сыға. Асыҡ тәҙрәне күреп бик аптырай. Шым ғына яҡын килеп, эстә барған ғауғаны тыңлай.

- Төлкө! Һин миңә әхирәт тә һаң! Беҙҙең килешеүҙе оноттоңмо әллә? Һиңә – бөтә тауыҡтар, ә миңә – бушап ҡалған киң тауыҡ ояһы!- тип сәрелдәй алйот тауыҡ.

- Һммм... Килешеү? Ниндәй килешеү? Тауыҡ менән минең арала ниндәй килешеү булыуы мөмкин? Һин дә мин ашаған тауыҡтар һымаҡ ахмаҡ икәнһең! - тип хахылдай төлкө.

Хужа эштең нимәлә икәнен шунда аңлап ҡала. Барған ғауғаға ҡыҫтырылып тормайынса, һөйләнә – һөйләнә өйөнә таба атлай:

“Хәйләкәрлегең, мәкерлегең, алдаҡсылығың һәм яуыз уйың өсөн һиңә шул кәрәк!”

Кем кешегә соҡор ҡаҙа, шул соҡорға үҙе төшә! Тормош шулай ҡоролған.



ЕРӘН МУТБИКӘ

Бер заман Арыҫлан батша үҙенә тоғро ярҙамсы табырға ҡарар итә. Сәркәтип ҡош указ сығара. Сапҡынсы ҡара ҡарғалар, алтын торбалар аша, батшаның иғланын бөтә урман әһелдәренә еткерергә ашығалар. Улар: “Батша урман әһелдәре араһында ярыш иғлан итә! Еңеүсене үҙенең баш министры итәсәк!” - тип һөрән һалалар.

Әйтелгән көндөң, әйтелгән ваҡытына, уртаһында ҙур таш яткан батшалыктың төп майҙаны булған аҡланға, урманда йәшәүселәр барыһы ла йыйыла. Батша эргәһендәге хөрмәтле урында ултырыр өсөн, һәр кем бәхетен һынап ҡарағыһы килә. Арыҫлан батша ҙур таш өҫтөндә ҡырын яткан килеш, майҙанға йыйылғандарға күҙ йүгертеп сыға. Айыу, юлба-

рыç, ҡаплан, бүре, ягуар, сүл бүреһе, янут, йылға ҡамаһы, ҡуян, терпе, төлкө һәм башҡа бик күп йәнлектәр йыйылған. Ҡапыл уның иғтибарын төлкө йәлеп итә: “Башҡалар тураһында аңлашыла, ә был мут, хәйләкәр нимәгә өмөт итеп килде икән?” – тип хайран ҡала Арыçлан. Беренсе итеп төлкөнө саҡырып ала

- Әйт әле, төлкө! Һинең беренсе алдаҡсы икәнеңде бар урман белә. Тоғролоҡ һәм ышаныслылыҡ бәйгеһенә нимә тип килдең инде?

- О минең намыçлы, күркәм холоҡло батшам! Үҙемдең насар данымдан һәм ғәҙәттәремдән арынып, һеҙҙең ышанысығыҙҙы яуларға теләгән инем! - тип, моңло тауыш сығарып яуап бирә, ялағайланып күпе-ренке ҡойроғон болғап, ергә һыйынып ятып баш эйә.

- Яҡшы! Дөрөç һөйләнеңме, юҡмы, тикшерермен әле! Бар! Әлегә китеп тор, килер ваҡыт, мин һине һынармын!

Төлкө намыçлы булырға тырыша. Был, әлбиттә, алдап өйрәнгән төлкөгә бик ауыр була. Уның һәр саҡ кемделер алдағыһы, мутлашҡыһы килеп тик тора. Тик уны: “Төлкө үҙәрмәгән, һаман да элеккесә алдаша, хәйлә-мәкер ҡороуын да ташламаған!” – тип батшаға еткереүҙәренән генә ҡурҡа.

Көн артынан көндәр уҙа... Төлкө батшаның үҙенә сағырып алып һынау үткәреүен көтөп йөрөй. Шулай йөрөй торғас, түҙемлеген юғалта: "Тағы күпме көтөргә була? Яҡшы булып ҡыланыу ҙа арытты!.."

Ваҡыт уҙа торҙо, әммә бер нәмә лә үҙгәрмәне. Төлкө шөбһәләнә башланы: "Батша шаяртты ғына, ахырыһы! Ул мине һынарға йыйынмай ҙа, шикелле. Хатта минең турала онотҡандыр ҙа әле... Яҡшы күренәм, тип нимәгә ыҙалап ҡыланып йөрөргә?!" Ҙур еңеллек тойоп, төлкө яңынан элекке ғәҙәттәренә әйләнеп ҡайта. Ул яңынан алдарға, мутлашырға тотона.

Ә аҡыллы Арыҫлан, уны ысынлап тороп һынар өсөн, төлкөнөң яҡшы яҡҡа үҙгәргән булып ҡыланыуынан ялҡҡанын ғына көтөп йөрөгән икән.

Был мәл дә килеп етә. Арыҫлан төлкө йөрөй торған һуҡмаҡҡа яҡыныраҡ килеп ята ла, үлергә йыйынған йәнлек кеүек ҡылана. Ул ауыр тын ала, күҙҙәре яртылаш йомолған, күкрәгенән ғырылдау һәм көсһеҙ генә ыңғырашыу сыға. Бына уны төлкө күреп ҡала, эргәһенә килә. Төлкө ошо саҡ ни эшләргә лә белмәй – ҡайғырырғамы, әллә ҡыуанырғамы:

- Батшам минең... һеҙҙең менән ни булды?

Арыҫлан өҙөк-өҙөк тауыш менән саҡ яуап ҡайтара:

- Һиңә китеп бара инем... Һине һынар өсөн... Анау ҡаянан ҙур таш айырылып аҫҡа тәгәрәне, уның артынан яуған таштар мине ҡапланы... Аяғым шунда һынған икән... Ярҙам ит инде, үлеп барам...

Төлкө йән-яғына эйәләнеп ҡараны, ысынлап та, тирә–яҡҡа таралып тәгәрәп ятҡан таштарҙы күрҙе. Ул Арыҫландың яраланыуына һәм үлем алдында ятҡанына ышанды. Әммә башҡаларҙы саҡырырға һәм ярҙам итергә ашыҡманы. “Әгәр ҙә мин уға ярҙам итһәм, ул йүнәләсәк, ә миңә иркен тормош бөтәсәк. Министр булһам да, булмаһам да өйрәнгән ғәҙәттәремдән баш тартырға кәрәк буласаҡ. Уның алдында һәр саҡ ғәҙел булып ҡыланырға, алдамаҫҡа тырышыу минең өсөн бик ауырға төшәсәк...” – тип уйлай төлкө. Бөтә нәмәне лә үҙ файҙаһына ғына эшләп өйрәнгән төлкөнөң йөрәгендә яралы Арыҫландың ғазап сигеүе, бер нинДәй ҙә йәлләү хисе уятмай. Ул батшаһын үлем менән яңғыҙ ҡалдырып, артабан йүгерә.

Был һынау ғына булһа ла, Арыҫлан урынында, кемдер, ысынлап та, ярҙамға мохтаж булып ятыуы ла бар ине. Ышаныслыҡтың бер шарты – файҙалы булыу бит!

Күпмелер ваҡыт үтә биргәс, төлкө аңғармаҫтан Арыҫланды осрата. Ул



тере һәм һап – һау ине. Көтөлмәгән осрашыуҙан төлкө шаҡ ҡатып телһеҙ ҡала, аҙаҡ иҫенә килеп, ҡыйыуһыҙ ғына:

- Хөрмәтле батшам! Һеҙ тереме ни? – тип һорай.

- Әлбиттә тере! Батша аяғын һындырғандан ғына үлеп ятмай инде! Был бит һиңә вәғәҙә иткән һынау ине! Ҡарт мутбикә, алдаҡсы һәм хәйләкәр төлкөгә ышаныра ярамағанын мин бик яҡшы беләм! Әгәр һин теге мәлдә ярҙам итһәң, һынауҙы үтеп, баш министр вазифаһын алыр инең. Унан тыш, насар даныңдан ҡотолоп, хөрмәтләләр рәтендә булыр инең! Аллаһҡа шөкөр, ысынлап һинең ярҙамыңа мохтаж булмағанға, сөнки ярҙамды тик ышаныслы кеше генә күрһәтә ала.

Шулай итеп, төлкө үҙенең ғәйебе арҡаһында бер нәмәһеҙ тороп ҡала...

ИҢ МӨҺИМЕ – САБЫРЛЫҠ!

Матур ғына бер урманда йәшәгәндәр, ти, айыу әсәй һәм уның бәләкәй генә балаһы. Айыу балаһы ҡыштың иң сатлама һыуығында донъяға килә. Яҙғы йылы көндәр тыуғансы ул әсәһе менән өңөндә ғүмер итә. Бына бер заман әсәһе уны урманға, тышҡа алып сыға. Ул ҙур гүзәл донъяны күреп хайран ҡала. Айыу балаһы өсөн бөтә нәмә яңы, ят һәм ҡыҙыҡ ине. Әсәһе уға ниндәй емештәрҙе, тамырҙарҙы, япраҡтарҙы ашарға яраҡлығын өйрәтә. Ергә ҡойолған сәтләүектәрҙе һәм үлән араһында йәшенеп үҫәкән бәшмәктәрҙе нисек табырға күрһәтә. Һәр көн улар өңдәренән алыҫыраҡ китәләр. Ә бер көн, ташлы ярҙарынан ярһып йүгергән, шаулап аҡҡан йылғаға килеп сығалар.

Әсәһе айыу балаһына: “Мин балыҡ тоторға китәм! Ярға яҡын килмә! Күрәһеңме йылға нисек шәп аҡҡанын? Ағыҙып алып китер үҙеңде. Мине ошонда көт!” – тигән дә, үҙе балыҡ тотор өсөн ҡулайлы урын табып,

эргәһенән йөҙгән балыктарҙы күҙәтә башлаған. Бына ул ҙур ғына балыкты күрә лә, һыуҙан тәпәйҙәре менән тартып ала һәм тешләп ярға ырғыта. Балаһын сакырып ала ла, бергәләп балыкты ашайҙар. Айыу, балык тото-уын дауам итер өсөн, яңынан йылғаға төшә.

Айыу балаһы әсәһенең балык тотоуын ҙур кыҙыкһыныу менән күҙәтә: "Кайһылай балык тотоу ябай ғына икәәән! Мин дә тота алам!" - тип уйлаған ул. Әсәһенең иҫкәртеүҙәрен дә онотоп йылғаға якынлай. Ярҙың ситендә яткан бәләкәй бүрәнәгә үрмәләп менә... Йылғаның тәрән булмаған ерендә тупланған, көмөштәй ялтыраған балык өйөрөн күрә. Уларҙы тоторға теләп тәпәйҙәрен һыуға тыға. Шул сак, ул ултырған бүрәнә бер тапҡыр сайҡалып ҡуя, шунан тағы сайҡала ла еңел генә ярҙан айырыла. Аға торғас, шәп ағынға эләгеп, ҡото осоп ҡурҡҡан айыу балаһын алыҫҡа ағыҙып алып китә. "Ә - сәәәй!" - тип, йөрәк әрнеткес ҡыҙғаныс тауыш менән ҡыскыра ул.

Бүрәнә, һыу уртаһында сукайып торған таштарға бәрелә – һуғыла, яр ситендәге ҡыуаҡлыктарға эләгә –эләгә таныш булмаған ерҙәр аша, уны әсәһенән алыҫайтып ағыуын белә... Айыу балаһына ныҡ ҡурҡыныс ине. Ул һыйынып дүрт тәпәйе менән бүрәнәне ҡосаҡлап ала.

Әсәһе балаһын йылға буйлап ағып барыуын күргәс, ни эшләргә лә бел-мәй өҙгәләнеп үкерергә һәм үрһәләнергә тотона. Ҡапыл әсә күҙ йәштәре-нең һәм үкһеүенең ярҙам итмәҫен төшөнөп, тиҙ генә тыныслануға һәм ҡәтғи бер аҙым эшләргә тейешлеген аңлап ала. "Йылға ағып, бер аҙ барғас,

унда шаршы бар, ул ерҙә һай булырға тейеш, - тип иҫенә төшөрә. - Ул шунда бүрәнәне тотоп аласаҡ. Өлгөрөп ҡалыр өсөн ашығырыға кәрәк миңә! Балам бүрәнәгә нык тотонһа ярар ине, һыуға ғына ҡолап төшмәһен!"... Ул яр буйлап йылғаның түбәнге ағымына хәленән килгәнсе йүгерә.

Бына алда шаршылык шаулай. Яҡыная биргәс, ағымға ҡаршы тығылған бүрәнәгә йәбешкән бәләкәй генә ҡара йомарлаҡ та күҙгә салынды. "Балаҡайым, улым! Нык тор!" – тип һамаҡлай – һамаҡлай, бар көсөн йыйып, ауыр тын алып, сәнскеле ҡыуаҡтарҙы йыра – йыра балаһына ынтыла әсәһе.

Айыу ҡапыл кеше еҫен һиҙеп ҡала. Яр башында, күшегеп бөткән, бүрәнә ҡосаҡлап ҡурҡышынан дер ҡалтыраған айыу балаһын ҡыҙыҡһынып күҙәткән кейек аулаусыны күрә. Уның ҡулында ау менән ата торған мылтык була. Һунарсы бәләкәй айыу балаһын тотор өсөн уға тоҫкай ине... Ул был уңышҡа бик ҡыуана. Сөнки өйөндә ҡыр йәнлектәренән зоопарк тоткан бер байға һатып ебәрәсәк бит уны! Хатта эстән генә күпме аҡса алаҫағын да һанап сығарҙы...

Айыу әсәнең йөрәге өҙөлөп төшкәндәй була. Уның үкереп – үкереп илағыһы килә. Илау менән генә баланды ҡурсалап буламы һуң? Ул үҙен ҡулында тоторға тырыша. Бер - нисә һикереү аша һунарсының артына барып баҫа ла, ауыр көслө тәпәйҙәре менән арҡаһына тондо-

роп, уны аяҡтан йыға. Һунарсы ҡолағанда башын ташҡа бәреп, иҫен юғалта. Ә мылтығы ҡулынан ысҡынып китеп, шапылдап йылғаға төшә...

Айыу һыу уртаһында ҡалған балаһына яҡынлаша, сикәһе менән уның башын һыйпай. Бәләкәсе әсәһенең арҡаһына менеп ҡосаҡлай ҙа, улар урманға инеп китәләр.

Курҡыныс һәм ҡайғы килгәндә, күҙ йәштәре ярҙамсы була алмай. Тик сабырлыҡ һәм үҙеңде дөрөҫ тотоу - төҙәтә алмаҫтай тойолған хәлде лә үҙгәртә ала.